✓ *Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Күптәрҙең ауылдарҙағы туғандарына, атай-әсәйҙәренә, мәктәптәренә, мәсеттәргә, дуҫтарына һәм таныштарына "Киске Өфө" гәзитенә яҙҙырып бүләк итеүен беләбеҙ. Ошо көндәрҙә генә РФ Дәүләт Думаһы депутаты Сәлиә Мырҙабаева 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн Әбйәлил, Баймаҡ, Бөрйән, Ейәнсура, Йылайыр, Күгәрсен, Хәйбулла райондары ағинәйҙәренә 25 дана "Киске Өфө" гәзите яҙҙырып бүләк итте. Матур йолабыҙҙы башҡалар ҙа күтәреп алыр, тип ышанабыҙ.*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

11 - 17 ОКТЯБРЬ (ҠАРАСАЙ) 2014 йыл

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№41 (615)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Аҡсала ла...

алтында ла түгел бәхет

3

Атайым өлгөһөндә...

үҙ эшемде ҡорҙом

6

Башҡортлоҡ - ул оло яуаплылыҡ

8-9

Тәбиғәтте алдап буламы?

Йәки гены үҙгәртелгән ризыҡтың ыңғай һәм кире яҡтары

12-13

14 ТВ-программа

Факиһа ТУҒЫҘБАЕВА

БАШҠОРТОСТАН

Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн,
Далаларың кеүек киң күңелле,
Йылғаларың кеүек моң-һағышлы,
Урмандарың кеүек бейек, серле
Булыу кәрәк,
Ерем - Башҡортостан!

Башҡортостан,
Һине аңлау өсөн,
Илкәйем тип, ярһып, ҡылыс болғап, -
Дауам иткән шулай нисә быуат, -
Һинең менән бергә яу сабырға,
Дарға аҫылырға, сабылырға,
Үлдем тигәс, ҡабат терелергә,
Урал батыр булып әүерелергә
Кәрәк, эй яҙмышым минең -
Башҡортостан!

Йырҙарыңды ергә күмһәләр ҙә,
Ҡурай булып сәскә атҡан йырың,
Йырҙарыңды ҡыра алмай ҡырғын!
Телкәйеңде ҡырҡып алһалар ҙа -
Үткерлеге уның ҡылысыңда,
Ә ҡылысың һәр саҡ ҡул осонда
Булған борон, утта янмаҫ,
Һыуҙа батмаҫ йырым минең -
Башҡортостан!

Һәр бер көнөң моңдоң өнө, гүйә.
Аҡһаҡалдарыңдың аҡылы ла,
Сабый хыялының ялҡыны ла,
Хәләл икмәк менән хәләл тоҙоң,
Һүнгән, балҡыясаҡ һәр йондоҙоң -
Йәншишмәләй генә моңдарыңда.
Уттан сыҡҡан өсөн һәр бер һүҙең,
Һәр һүҙеңдә балҡый яҡты йөҙөң,
Эй тормошом минең -
Башҡортостан!

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Ниндәй генә заманда йәшәмәйек, илһөйәрлек изге төшөнсә булыуҙан туҡтамай. Ә бөгөнгө замандаштарҙың илһөйәрлек рухын нисек баһалайһығыҙ?

Мирза КИРАМОВ, "Ырымбур һауа юлдары" авиакомпанияһы бортпроводнигы: Ҡайһы бер замандаштарым граждандарҙың илһөйәрлек тойғоһо коммунистик идеалдар менән бергә үткәндә тороп ҡалды, тигән фекерҙә. Икенселәр иһә бының менән килешмәй һәм илебеҙҙең донъя аренаһындағы тоторокло урынын, иҡтисади климаттың яҡшырыуын, ғөмүмән, тормоштоң алға барыуын илдә нәҡ илһөйәрҙәрҙең күп булыуы менән бәйле, тип аңлата. Миңә ҡалһа, был мәсьәләгә еңел һәм өҫтән генә ҡарап булмай. Уҙған быуатта илдә булып үткән үҙгәртеп ҡороуҙар һөҙөмтәһендә донъяуи ҡиммәттәр системаһы үҙгәрҙе. Кисә юғары баһаланған сифаттарҙың бөгөн күптәр өсөн бер ниндәй ҙә ҡиммәте юҡ. Патриотлыҡта әлеге ваҡытта үҙенең тәүбашланғыс әһәмиәтен юғалтҡан төҫлө.

Минеңсә, илһөйәрлек ошо ерҙә тыуған һәм йәшәгән һәр кемдең иленә булған һөйөүенә генә түгел, ә үҙен уратып алған йәмғиәткә файҙалы була алыуына ҡайтып ҡала. Улар иҫәбенә намыҫлы хеҙмәт итеү, сәләмәт тормош алып барыу, ғәҙел булыу, әйткән һүҙҙә тора белеү, изгелекте һәм игелекте алға ҡуйыу кеүек бурыстар һәм сифаттар инә. Абруйлы, лайыҡлы тормош алып барыусы ғына шәхес буларaҡ үҫешә һәм, тәбиғи, ошондай кеше генә үҙ иленә файҙа килтереү мөмкинлегенә эйә. Шуға күрә, ниндәйҙер эштәр менән нығытылмаған, "Илемде яратам" тип матур һүҙҙәр һөйләүгә генә ҡайтып ҡалған илһөйәрлек буш ҡыуыҡты хәтерләтә, ул саҡ ҡына ҡаршылыҡ булһа, юҡҡа сыға. Бөгөнгө йәмғиәттә күпселек ошоно яҡшы аңлай һәм илһөйәрлеген уңышлы эшмәкәрлеге һәм лайыҡлы тәртибе менән иҫбат итә. Халҡында илһөйәрлек рухы булмаған дәүләт иртәме-һуңмы һәләкәткә дусар. Беҙгә бындай ҡурҡыныс янамай. Быға иманым камил.

Илһөйәрлектең тағы бер күрһәткесе - туған телгә булған мөнәсәбәт. Тел - халыҡтың баһалап бөткөһөҙ милли байлығы. Нәҡ тел милләттең, халыҡтың мәҙәни һәм рухи үҙаллылығы башланғысы. Тел юғалһа, ул да юғала. Тимәк, илһөйәрлектең бер күрһәткесе - кешенең туған теленә булған иғтибары һәм ихтирамы. Бөгөнгө Башҡортостанда, Өфөлә үҙ телендә иркен һәм, иң мөһиме, бик теләп аралашҡан милләттәштәремдең күп булыуы ҡыуандыра. Был иһә улар йөрәгендә илһөйәрлек рухының ныҡлы булыуының асыҡ сағылышы.

(Дауамы 2-се биттә).

БАШ ЙОРТТА

БЕҘҘЕҢ ӨФӨБӨҘҘӘ...

туған телдәр һанлана

Республика көнөнә арналған байрам саралары сиктәрендә Өфө ҡала округы хакимиәтендә Башҡортостан Республикаһының дәүләт һәм туған телдәрҙе үҫтереү һәм пропагандалауға ҙур өлөш индергән мәғариф, мәҙәниәт һәм сәнғәт, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы премияһын тапшырыу тантанаһы үтте.

(Дауамы 4-се биттә).

✓ 11 октябрь Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларация ҡабул итеү көнө генә түгел, ул - илһөйәрҙәр, үҙ иленең патриоттары, уны ысын күңелдән яратыусылар байрамы.

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

ТЫУҒАН КӨНГӘ БҮЛӘККӘ...

"Киске Өфө" менән танышыуыбыҙ ҡыҙыҡлы булды. Бынан бер-нисә йыл элек туғандар, балалар менән иремдең юбилей байрамына йыйылдыҡ. Матур, зиннәтле, иҫтәлекле бүләктәр күп төштө, ләкин шулар араһында иң үҙенсәлеклеһе яҡындарыбыҙҙың береһе бүләк иткән "Киске Өфө" гәзитенә йыллыҡ абонемент ине. Ошо ваҡыттан алып гәзит - ғаиләбеҙҙең айырылмаҫ дуҫы, аҙна һайын көтөп алған ҡәҙерле ҡунағы, кәңәшсеһе, йыуатыусыһы, йылмайыу бүләк итеүсеһе.

Шәхсән үҙемә килгәндә, тәү сиратта, гәзиттәге рәсми мәҡәләләрҙең "тере" булыуы оҡшай. Ҡала хакимиәтенең, республика етәкселегенең һәм башҡа рәсми сараларҙың ҡоро факттарҙан торған мәғлүмәтен биреү абруйлы, әлбиттә, ләкин ваҡиға урынында журналистың булыуы һәм үҙенең тәьҫораттары менән һуғарылып яҙылған мәҡәләһенә етмәй. Ошо йәһәттән "Киске Өфө" байтаҡ баҫмаларҙың "танауына сиртә".

Шулай уҡ гәзит күп яҡлы, әммә шул уҡ ваҡытта ыҡсым, йыйнаҡ булыуы менән дә айырылып тора. Баҫма биттәрендәге бар рубрикаларҙың да төптән уйланып асылғанлығы күҙгә ташлана, сөнки уларҙың һәр береһендә уйландырырлыҡ та, һоҡландырырлыҡ та, борсоуға һалырлыҡ та, шатлыҡтан күҙҙән йәштәр сығарырлыҡ та мәҡәләләр баҫыла. Бында өҫтөнлөклө, илке-һалҡы ғына яҙылған мәҡәләләр булмай - шул яҡтан да "Киске Өфө" маҡтауға лайыҡ.

Ләкин гәзиттең иң баһалы хеҙмәте - ул Башҡортостаныбыҙҙы яратырға өйрәтеүе. Баҫылған һәр мәҡәлә тыуған илебеҙ менән ғорурланыу тойғоһо уята, уларҙа тарихыбыҙ төрлө яҡлап яҡтыртыла, халҡыбыҙға, телебеҙгә, йолаларыбыҙға ҡарата оло ихтирам һәм иғтибар ярылып ята. Гәзиттең һәр һанын уҡыған һайын үҙебеҙҙең шундай гүзәл ерҙә йәшәүебеҙҙе нығыраҡ төшөнәһең. Үҙеңде ошо тарихтың бәләкәй генә булһа ла өлөшө булыуыңды аңлап ғорурланаһың. Ошо тойғоларҙы бүләк итеүе өсөн "Киске Өфө"гә оло рәхмәтемде белдерәм.

Әйткәндәй, беҙҙең яҡындарыбыҙ араһында хәҙер тыуған көндәргә "Киске Өфө" гәзите яҙҙырып бүләк итеү даими күренешкә әйләнде. Ә гәзит ҡулына бер тапҡыр эләккән кеше унан айырыла алмай, артабан үҙе яҙыла. Шул рәүешле бөтә туғандар, дуҫтар араһында "Киске Өфө"гә яҙылыусылар һаны арта.

Айгөл ХӘМИТОВА.
Ейәнсура районы.

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Ниндәй генә заманда йәшәмәйек, илһөйәрлек изге төшөнсә булыуҙан туҡтамай. Ә бөгөнгө замандаштарҙың илһөйәрлек рухын нисек баһалайһығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

Рифат ЛОҠМАНОВ, полиция майоры: Илһөйәрлек, ватансылыҡ һәр кемдә үк булмаһа ла, күбебеҙҙә бар һәм буласаҡ. Ул беҙгә тыуған еребеҙҙең һауаһы, һыуы, тәбиғәте, халҡыбыҙҙың теле, йырҙары һәм риүәйәттәре, ғөрөф-ғәҙәттәре, холоҡ-фиғеле, йәшәү рәүеше һәм башҡа күп нәмәләр аша һеңә һәм ғүмерлеккә тамыр йәйә. Йөрәктең иң түрендә быҫҡып ҡына янған тойғо бер ҡасан да һүрелмәй, киреһенсә, кәрәк саҡта дөрләп тоҡаныу һәләтенә эйә. Ҡайһы берәүҙәр генә үҙҙәренең ҡылығы менән иленә, халҡына яуызлыҡ эшләй. Тимәк, ундайҙарҙың йөрәгендә илһөйәрлеккә урын юҡ. Бындай юлға барған әҙәмдәр затлы, әммә үҙ баһаһын тиҙ юғалтасаҡ ялтыр-йолторға алданып, үҙенең булмышына, ғорурлығына төкөрә. Уларҙың тыштан бик шәп күренһә лә, эстән ҡалтырауға һәм бахырлыҡҡа таянған йәшәйештәренең бөгөнгөһө лә тотороҡһоҙ, киләсәге лә ышанысһыҙ.

Хәҙер ватансылыҡтың абруйы төштө, тиеүселәр ҙә бар. Ләкин мин был ҡараш менән килешмәйем. Илһөйәрлектең бер ҡасан да дәрәжәһе төшмәй һәм кәмемәй. Бында үҙҙәрен тыуған иленең патриоты тип йөрөткән һәм шул уҡ ваҡытта уны талаған, һатҡан кешеләрҙең йәмһеҙ ҡылығы хаҡында һүҙ йөрөтөү дөрөҫөрәк булыр. Бына ошондай кешеләр ысын илһөйәрлекте шик аҫтына ҡуя.

Сәлим ҒИНИӘТОВ, Өфө дәүләт нефть техник университеты аспиранты: Бөгөнгө көндә йәмғиәттә илһөйәрлеккә ҡарата ҡараш ҡатмарлы, хатта буталсыҡ тип әйтер инем. Ҡыҙғанысҡа күрә, илһөйәрлек тойғоһон милләтселеккә, хатта шовинислыҡҡа алып барып бәйләргә тырышыусылар ҙа тулып ята. Беҙ үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙе, телебеҙҙе, тарихыбыҙҙы яратҡан һәм ихтирам иткән милләт. Тик беҙ бер ҡасан да республикала йәшәүсе башҡа милләт вәкилдәренә кәмһетеп ҡарамайбыҙ, үҙебеҙҙе уларҙан өҫтөн ҡуймайбыҙ. Ғөмүмән, илһөйәрлегебеҙ ҙә, толерантлығыбыҙ ҙа баштан ашҡан.

Илһөйәрлекте милләтселеккә бәйләргә тырышыуҙар менән беҙ тәүгә осрашмайбыҙ. Уҙған быуатта республикабыҙға суверенитет яулау юлына баҫҡан зыялыларыбыҙ ҙа ошондай уҡ ғәйепләүҙәргә дусар булды. Башҡа төбәктәр халҡы кеүек үк үҙалыллыҡҡа ынтылыуыбыҙ ҡайһы берәүҙәр тарафынан республикала йәшәгән башҡорт булмаған халыҡтарҙың хоҡуҡтарын сикләргә тырышыу тип ҡабул ителде. Ләкин суверенитетты сепаратизмға тиңләп күрһәтергә маташыуҙар күпселек сәйәсмәндәр, республиканың төрлө социаль ҡатламы, милләттәре тарафынан инҡар ителде һәм Башҡортостандың Рәсәй составында сәйәси һәм иҡтисади йәһәттән үҙаллы төбәк булып йәшәү идеяһы күпселек менән хупланды. Ваҡыт был аҙымдың дөрөҫ булыуын иҫбат итте. Бөгөнгө көн күҙлегенән сығып ҡарағанда, суверенитет яулағандан һуңғы йылдар республиканың күп милләтле халҡы өсөн ысын мәғәнәһендә үҫеш йылдары булды. Халҡыбыҙ үҙ өҫтөнә алған ҙур яуаплылыҡты лайыҡлы күтәрҙе, сөнки бар башланғыстарҙың да нигеҙендә илһөйәрлек рухы ятты. Шуға күрә 11 октябрь Башҡортостандың дәүләт суверенитеты тураһындағы Декларация ҡабул итеү көнө генә түгел, ул - илһөйәрҙәр, үҙ иленең патриоттары, уны ысын күңелдән яратыусылар байрамы.

Гөлназ МАНАПОВА
яҙып алды.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

Гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһының тағы бер миҙгеле башланды. Ул баҫмабыҙҙың киң мәғлүмәт саралары баҙарындағы урынын, тотороҡлолоғон билдәләүсе, шулай уҡ уҡыусыларыбыҙҙың тоғролоғон, ихтирамын, хатта аңлылыҡ, рухлылыҡ кимәлен дә күрһәтеүсе мәл, тип баһалана икәнен тағы бер тапҡыр иҫегеҙгә төшөрәбеҙ.

● Шулай итеп, 2015 йылдың беренсе яртыһы өсөн октябрҙән **50665** индекслы "Киске Өфө"гә **513 һум 72 тингә** яҙылырға мөмкин. Предприятиелар һәм ойошмалар өсөн билдәләнгән 50673 индекслыһының хаҡы - **543 һум 72 тин**.

● Октябрҙә "Киске Өфө" гәзитенә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәргән 2 уҡыусыбыҙ - **"Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре һәм әйтемдәре"**, 2 уҡыусыбыҙ - **С. Руденконың "Башкиры"**, 2 уҡыусыбыҙ - **"История башкирского народа"**, 10 уҡыусыбыҙ башҡортса **"Дини календарь"**, 10 уҡыусыбыҙ **Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарын алып ҡыуаныр.

Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килә: ярты йылға - **252 һум**.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - **252 һум**.

Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы kiskeufa.ru сайтында **"Яҙылыу"** тигән төймәгә баҫып, **"Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу (540 һум 78 тин)"** һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**.

Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!

МӨХӘРРИРИӘТ.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓ Өфөлә Франция менеджерҙары делегацияһының республика Хөкүмәте вәкилдәре менән осрашыуы үтте. Ҡунаҡтарҙың сәфәр маҡсаты - Рәсәйҙәге партнерҙар менән тышҡы иҡтисади бәйләнештәр булдырыу.

✓ Өфөлә Конгресс-холда ШОС илдәре делегациялары ҡатнашлығында Йәштәр инновацион форумы булып үтте. Унда Рәсәй Федерацияһы субъекттары һәм ШОС илдәренең фәнни ойошмалары һәм белем биреү учреждениеларынан 35 йәшкә тиклемге йәш ғаилимдар ҡатнашты. Улар төрлө номинацияларҙа үҙҙәренең фәнни эштәрен тәҡдим итте, түңәрәк ҡорҙарҙа фекер алышты, оҫталыҡ дәрестәре күрһәтте.

✓ Байрам алдынан Өфө ҡала Советы рәйесе Евгений Семивеличенко 33 алдынғы хеҙмәткәргә бүләктәр тапшырҙы. Бүләкләнеүселәр араһында төрлө һөнәр эйәләре, шулай уҡ Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары ла бар. Ҡала Советы бындай сараларҙы оло байрамдар алдынан йылына бер нисә тапҡыр ойоштора.

✓ Республика көнөндә Өфөлә БР Юғары спорт оҫталығы әҙерлеге үҙәгендә XXI Милли һәм халыҡ спорт төрҙәре буйынса фестиваль үтә. Көрәш буйынса ярыштарҙа 18 йәштән өлкән ир-егеттәр бөтә ауырлыҡ төрҙәрендә лә көс һынашасаҡ. Шулай уҡ ирҙәр араһында ла, ҡатын-ҡыҙҙар араһында ла армспорт (ҡул көрәше) буйынса ярыштар ойошторолаcаҡ. Ирҙәр гер күтәреү буйынса ла ярыша аласаҡ. Сара 11 октябрҙә сәғәт 11-ҙә башлана.

✓ Өфө ҡала округы Советының күптән түгел булып үткән ултырышында депутаттар элек ҡабул ителгән "2014 йылға һәм 2015-2016 йылдарҙың план осорона Башҡортостан Республикаһының Өфө ҡала округы бюджеты тураһында"ғы ҡарарға үҙгәрештәр ҡабул итте. Бындай үҙгәрештәр ҡалаға республика бюджетынан өҫтәмә аҡса бүленеү сәбәпле барлыҡҡа килде. Өфө ҡалаһы үҫешенә 2014 йылға 1, 845 миллиард һәм 2015 йыл өсөн 110 миллион һум аҡса бүленде.

✓ Өфө ҡала Советы ултырышында депутаттар дүрт яңы урамға исем бирҙе. Киров районындағы шул урамдарҙың өсәүһенә, шунда йәшәүсе халыҡтың һорауы буйынса, Ҡамышлы, Күл араһы һәм Парус исемдәре бирелһә, дүртенсеһе, Шаҡша микрорайонындағыһы, Афған һуғышында һәләк булған яугир-интернационалист (үлгәндән һуң ул Ҡыҙыл Йондоҙ ордены менән наградланды) Рәфит Исламов хөрмәтенә уның исемен йөрөтәсәк.

КӨНАУАЗ

АҠСАЛА ЛА...

алтында ла түгел бәхет

Уҡыусыға алтын яратҡан Фригия батшаһы Мидас тураһындағы тарих мәғлүмдер. Ул Дионистан уға үҙе ҡағылған бар нәмәне алтынға әйләндереү һәләте биреүен үтенә. Әммә бер көн эсендә ул бар ҡағылған нәмәләре, хатта үҙе яратҡан роза сәскәләре һәм яратҡан берҙән-бер ҡыҙы ла алтынға әйләнгәс, ысын бәхеттең алтында түгел икәнен аңлай. Бәхеткә күрә, Дионис уға алтынға әйләнгән нәмәләрҙе кире үҙ хәленә ҡайтарыу һәләтен дә биргән була...

Санкциялар һуғышы үҙ маҡсатына өлгәшә башланы шикелле. Рәсәй Хөкүмәте нисек кенә тырышмаһын, хаҡтарҙың артыуы дәүләт контроленә буйһонмай, тиҙлеген арттыра бирә. Был халыҡтың күпселеге тарафынан ыңғай ҡабул ителмәһә лә, Рәсәй иҡтисады үҫеше өсөн яңы офоҡтар асты: үҙебеҙҙең етештереүселәр был шарттарҙа яҡшы табыш алып, баҙарҙы сифатлы тауар менән тәьмин итә алды - ҡытлыҡ тигән нәмә һиҙелмәй. Күптәр уйлана башланы: баҙарҙан ит, һөт продукттары һатып алыу урынына үҙеңдең малыңды аҫырау отошлораҡ түгелме? ВТО-ға инеү, ил сиктәрен асыу хатта ауыл кешеһе өсөн был шөғөлдө файҙаһыҙға әйләндерә башлағайны бит...

Санкцияларға элөккән дәүләт корпорациялары резерв фондтарындағы аҡсаға дәғүәләрен белдерә тора. Олигарх Аркадий Ротенбергтың Италиялағы виллаларына арест һалғас, Дәүләт Думаһына ошоноң һымаҡ юғалтыуҙарҙы Рәсәй бюджетынан ҡаплау кәрәклеге тураһында закон проекты индерелә һалды. Ә бит Советтар осоронан ҡалған бурыстарҙы тиҙерәк ҡаплау тураһындағы уй бер депутаттың башына ла инеп сыҡмағайны. Һаҡлыҡ банкыһындағы, "Росгосстрах"тағы аҡсаларҙы "тамсылап" ҡына ҡайтарған булалар...

Владимир Путиндың инаугурацион указдарының үтәлеше лә иғтибарҙан ситтә ҡала. Бюджет тармағы хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡын арттырыу тураһында оноторорға тырышалар. Был йәһәттән үҙҙәренә миллионлаған эш хаҡы ҡуйырға яратҡан ректорҙар корпусы даими "һелкенеп" тора. Һуңғы йылдарҙа ғына республиканың 3 алдынғы вузында ректорҙар эштән ебәрелде.

Рәсәй Хөкүмәтендә лә иҡтисади һәм социаль тармаҡтар етәкселәре араһындағы тартҡылаштар тураһында мәғлүм булды. Иҡтисади үҫеш һәм финанс министрлыҡтары әсәлек капиталын бөтөрөү тураһында һүҙ ҡуйыртһа, социаль блок етәкселәре быға ҡәтғи ҡаршы сыҡты. Шуныһы ҡыҙыҡ, улар, үҙ файҙаһына килтергән дәлилдәрҙең бик икеле, шикле булыуына ҡарамаҫтан, үҙ позицияһын ныҡ яҡлайҙар. Әсәлек капиталы демографик үҫешкә һиҙелерлек тәьҫир итмәне, тип бара финанс блогы. Йәнәһе, "бала табыу календары ғына күсте" (икенсе баланы иртәрәк таба башланылар, ә балалар һаны артманы), ауыр шарттарҙа йылына 300 миллиард һум түләү дөрөҫ түгел. Шул ҡатмарлы ваҡытта ярҙам рәүешендә булдырылғайны түгелме ни әле әсәлек капиталы?

Бөгөн әсәлек капиталы 429 мең һум тәшкил итә. Киләһе өс йылда уны ярты миллионға еткереү күҙаллана. Был аҡсаны халыҡтың күпселеге торлаҡ алыу өсөн ҡуллана. 2009 йылдың 1 ғинуарынан башлап 2014 йылдың башына тиклем 2,3 миллион ғаилә был аҡсаны алған, 95 проценты уны торлаҡ алыу өсөн файҙаланған, 2/3 өлөшө (1,5 миллион ғаилә) ипотека түләү өсөн ҡулланған.

Росстат мәғлүмәттәре буйынса әсәлек капиталының тыуымға булған тәьҫире бик ыңғай: 2000 йылдар башында бер ҡатын уртаса 1,3 бала тапһа, бөгөн был күрһәткес 1,7-гә етте. Фән буйынса ул 2,15-тән дә кәм булырға тейеш түгел. Демографтар билдәләүе буйынса, әсәлек капиталы башлыса 25 йәштән олораҡ ҡатындарҙы ғына дәртләндерҙе. Йәшерәктәре өсөн уның йоғонтоһо юҡ кимәлендә. Рәсәйҙең ярлыраҡ төбәктәре, моноҡалалар һәм ауылдарҙа йәшәгән ғаиләләр өсөн был ҙур ярҙам булды. Мәҫәлән, 2007 йылда 250 мең һумлыҡ әсәлек капиталы Дағстанда 44 айлыҡ эш хаҡын тәшкил итһә, бөгөн 406 мең һум тик 25 айлыҡ эш хаҡына тиң. Мәскәү өсөн был 2007 йылда 11 айлыҡ эш хаҡына тиң булһа, бөгөн 7 айлыҡтан артығыраҡ. Мәскәүҙә йәшәгән чиновниктарҙың был "файҙаны" күрмәүенә аптырарға ярамай. Әсәлек капиталын демографик һәм финанс күрһәткестәр менән генә сикләү дөрөҫ түгелдер. Атай һәм әсәй, олатай һәм өләсәй булыу бәхетен аҡса менән генә үлсәп булмай шул. Халыҡ юҡҡа ғына "Маллы бай түгел, уллы бай", тип әйтмәгән.

Бында икенсе факторҙы ла инҡар итергә ярамай. Бала тыуған ғаиләлә ата-әсәй күберәк аҡса эшләргә ынтылып тора. Әсәлек капиталын бөтөрөү йәмғиәт тарафынан кире ҡабул ителәсәк, сөнки был күп балалы ғаиләләрҙең Рәсәй дәүләтенә кәрәкмәй тигән сигналы булып яңғыраясаҡ.

Бюджет тармаҡтарын оптималләштереү процестары тамамланды, буғай. Һәр хәлдә, был сара менән ҡаҙна сығымдарын кәметеү мөмкинлектәре бөттө шикелле. Чиновниктар ҡаҙна килемдәрен арттырыу сараларын эҙләү менән мәшғүл. Рәсәй Сәнәғәт һәм сауҙа министрлығы яңы тәкдим эшләне, йәғни киоскыларҙа алкоголь һәм тәмәкене һатыуҙы киренән рөхсәт итергә кәрәк, тип һүҙ күтәрҙе. Билдәле булыуынса, һыранан башҡа алкоголь һатыу киоскыларҙа 1998 йылдан бирле тыйылғайны. 2013 йылдың 1 ғинуарынан майҙаны 50 квадрат метрҙан кәм булған магазиндарҙа һыраны һатыу ҙа тыйылды. Шул иҫәптән был эсемлектәрҙе рекламалау ҙа туҡтатылғайны. Әйтергә кәрәк, был саралар бик һөҙөмтәле булды. Эскелек һиҙелерлек кәмене. Рәсәй Хөкүмәте 2020 йылға тиклем алкоголде ҡулланыуҙы 55 процентҡа кәметеү бурысын да ҡуйғайны. Әммә ҡаҙна ихтыяжы был яҡшы башланғыстан баш тартырға мәжбүр итәсәк. Төндә спиртлы эсемлектәрҙе һатыуҙы рөхсәт һәм йәш буйынса сикләүҙе кәметеүҙе көтөргә ҡала. Бында ла тик беренсе планға ҡуйылған аҡсаны айыҡ тормош биргән бәхет менән сағыштырып булмай.

Был йәһәттән социологтар үткәргән тикшереүҙәр һөҙөмтәһе бик ҡыҙыҡ күренде. Иҡтисадсылар тарафынан ҡулланылған макроэкономик индикаторҙарҙың (эске тулайым продукт, хеҙмәт етештереүсәнлеге, эш хаҡының күләме һ.б.) кеше йәшәйешен билдәләүҙә тотҡан роле сикле икәне бер кемгә лә сер түгел ине. 2013 йылда 135 дәүләттә 133 000 кеше араһында үткәрелгән тикшереү һөҙөмтәләре буйынса аҡса (финанс) йәһәтенән яҡшы күрһәткестәре булған дәүләттәрҙә йәшәгән халыҡ мотлаҡ бәхетле булырға тейеш, тигән фекер дөрөҫтән булып сыҡманы. Иң бәхетле дәүләттәр - улар Панама, Коста-Рика, Дания, Австралия һәм Бразилия. Бай булып иҫәпләнгән 4 кенә дәүләт (Швеция, Дания, Канада, Голландия) бәхетле беренсе тиҫтәгә инә алды. Йәшәү кимәле генә бәхетте билдәләмәй икән. Рәсәй 62-се урынды алды. Беҙҙең үҙенсәлек булып быуындар араһындағы айырманың үтә лә ҙур булыуы тора. 45 йәштән олораҡтар үҙҙәренең матди хәлен йәшерәктәргә ҡарағанда насар тип иҫәпләй (ололарҙың - 52 проценты, йәшерәктәрҙең - 38 проценты). Оло быуындың "бәхете" бөтә күрһәткестәр буйынса ла йәштәрҙекенән хөртөрәк: һаулыҡ торошо буйынса (36 процент һәм 8 процент), финанс буйынса - 31 процент һәм 21 процент, ғүмер маҡсаттарына 45 процент оло кеше өлгәшмәнем тип иҫәпләһә, йәштәрҙең тик 27 проценты ғына үҙен уңышһыҙ тоя.

...Әйткәндәй, ҡомһоҙ Мидас һуңынан Аполлон менән йырҙа ярышып еңелә. Әммә үҙенең еңелеүен танымауы арҡаһында ишәк ҡолаҡлы булып ҡала. Мидас һымаҡ, һалпы ҡолаҡлы булып ҡалмаҫҡа ине ул.

Илдар ҒӘБИТОВ.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Байрам алдынан республиканың юғары уҡыу йорттарында студенттарға атамалы стипендиялар тапшырыу ҙа матур йолаға әүерелгән. Өфө дәүләт нефть техник университетында, мәҫәлән, быйыл 97 студент, аспирант һәм докторант ошондай стипендияға эйә булды.

✓Өфө ҡала Советы депутаттары баш ҡаланың Ашығыс медицина ярҙамы станцияһы хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡына өҫтәмә түләү хаҡында ҡарар ҡабул итте. Врачтар өсөн өҫтәмә күләме - 3500, урта һәм кесе медицина персоналына 1500 һум тәшкил итә. Ул ошо йылдың 1 августынан 31 декабргә тиклемге ваҡытҡа билдәләнгән, ҡала бюджеты иҫәбенән түләнә. Ашығыс медицина ярҙамы станцияһында 727 кеше иҫәпләнә, шуларҙың 574-е - урта һәм кесе медперсонал, врачтар бөтәһе 153 кеше.

✓Мәскәүҙә XVI "Алтын көҙ" Рәсәй агросәнәғәт күргәҙмәһе асылды. Унда Башҡортостан вәкилдәре лә ҡатнаша. Беҙҙең күргәҙмә стенды залдың 140 квадрат метр майҙанын биләй. Унда төбәктең 40 ауыл хужалығы предприятиеһының продукцияһы ҡуйылған. Милли ризыҡтар күргәҙмәһе айырыуса иғтибар үҙәгендә.

✓Бөгөн, Республика көнөндә, Өфө майҙандарында төрлө мәҙәни-спорт саралары үтә. Ленин исемендәге үҙәк майҙанда байрам программаһы концерт менән асыла. Ошонда уҡ "Өфө - йәштәр ҡалаһы" тигән флешмоб, шулай уҡ төрлө күргәҙмәләр, тамашалар, ә Ленин урамында иһә "Оҫталар ҡалаһы" күргәҙмәһе ойошторола. Тантаналар киске 10-да байрам фейерверкы менән тамамланасаҡ.

✓Октябрь башында Нефтекама ҡалаһы дауаханаһына аныҡ булмаған ағыуланыуҙар менән 35 кеше мөрәжәғәт итә. Биш кеше дауаханаға килеп етә алмай һәләк була. Спайс, йәки тарта торған матдә менән ошо арала ғына Рәсәйҙә 700-ләп кеше ағыуланыуы билдәле. Был осраҡты тикшереүгә БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары йәлеп ителде. Әйтеүҙәренсә, Дәүләт Думаһында Рәсәй биләмәһендә бындай тарта торған матдәләрҙе таратыуҙы тыйыу тураһында закон проекты әҙерләнәсәк.

“Башинформ”дан.

✓ *Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте уҡытыусыһы И. Н. Бессонов инһә, туған тел, шулай уҡ Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәрестәренең уҡыу программаларынан төшөп ҡалыу хәүефе янауына борсолоуын белдерҙе.*

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

БУШЛАЙЫМЫ?

Уныһы тамамлана

Дәүләт һәм муниципаль торлаҡ фондының торлаҡ биналарын түләүһеҙ хосусилаштырыу программаһы 2015 йылдың 1 мартында тамамлана.

Башҡортостан һәм уның баш ҡалаһының күпселек халҡы был хоҡуҡтан файҙаланды ла инде, ә башҡаларға бының өсөн ярты йылдан да аҙыраҡ ваҡыт ҡалды. Торлаҡты түләүһеҙ хосусилаштырыу илдең бөтә төбәктәрендә лә 1992 йылда башланғайны һәм ул, яңы Торлаҡ кодексы ҡабул ителеү менән бәйле, 2007 йылдың 1 ғинуарында тамамланырға тейеш булһа ла, аҙаҡ өс тапҡыр оҙайтылды: 2010 йылдың 1 мартына, 2013 йылдың 1 мартына һәм әле бына киләһе йылдың 1 мартына тиклем.

Юридик яҡтан ҡарағанда, хосусилаштырыу - ул торлаҡтың муниципаль торлаҡ фондынан граждандар милкенә күсеүен аңлата. Торлаҡ майҙаны менән ирекле эш итеү хоҡуғынан тыш, граждандар үҙ иңенә билдәле бер бурыстар ҙа йөкләй, мәҫәлән, уға капиталь ремонт мәсьәләһен.

Милексе торлаҡ менән Гражданлыҡ кодексы сиктәрендә үҙе теләгәнсә эш итә, тигәйнек. Йәғни ул уны һатып ебәрә, залог милке сифатында файҙалана, коммерция нигеҙендә яллауға бирә ала. Хосусилаштырылған торлаҡ милкенә хоҡуҡ гражданин башҡа адрес буйынса теркәлгән осраҡта ла юғалмай.

Әгәр гражданин социаль яллау килешеүе буйынса фатирҙа йәшәй икән, ул милексе түгел, ә яллаусы. Яллаусының был торлаҡта йәшәргә хоҡуғы булһа ла, ул фатир менән үҙе теләгәнсә эш итә алмай, шулай уҡ күп фатирлы йортҡа идара итеү эшендә лә ҡатнаша алмай.

Һәр граждан бер генә тапҡыр торлаҡ хосусилаштырыу хоҡуғына эйә. Хосусилаштырыу торлаҡты граждандар милкенә тапшырыу килешеүе рәүешендә башҡарыла. Шул уҡ ваҡытта фатирын хосусилаштырыусы тейешле органдың милекселек хоҡуғын мотлаҡ дәүләт теркәүе процедураһын үтергә бурыслы.

Башҡортостан буйынса Дәүләт теркәүе, кадастр һәм картография Федераль хеҙмәт идаралығы мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2014 йылдың тәүге ярты йыллығында Күсемһеҙ милек һәм уның менән эш итеү хоҡуҡтарының берҙәм дәүләт реестрында торлаҡ биналарын милеккә түләүһеҙ тапшырыу килешеүҙәре нигеҙендә 1 124 973 хоҡуҡ теркәлгән.

Өфө хакимиәте ҡала халҡын хосусилаштырыуҙы аҙаҡҡы көнгә тиклем һуҙмауын һорай. Бының өсөн Ҡала күсемһеҙ милек үҙәгенең торлаҡты хосусилаштырыу идаралығына (Степан Халтурин урамы, 59, "Һалле округы" туҡталышы, тел.: 282-44-57) мөрәжәғәт итергә кәрәк.

БАШ ЙОРТТА

БЕҘҘЕҢ ӨФӨБӨҘҘӘ...

туған телдәр һанлана

(Башы 1-се биттә).

Тел - ул йәмғиәттең иң ҡеүәтле ҡоралы. Тап тел кешеләрҙе бер милләткә берләштерә, был телдә һөйләшеүселәр булғанда ғына халыҡтың мәҙәниәтен, йолаларын һаҡлау мөмкинлеге тыуа. Быуаттар буйына атабабаларыбыҙ алып барған милли азатлыҡ көрәштәренең нигеҙендә туған тел дә ята, һәр замандың иң билдәле шағирҙарының әҫәрҙәрендә туған телдең матурлығы һәм бөйөклөгөнә дан йырлана.

Бөгөнгө глобалләшеү шарттарында кешенең теге йәки был милләт вәкиле булыуы тел һәм һүҙҙә генә билдәләнеүгә ҡалған заманда Өфө ҡала округы хакимиәтенең тел сәйәсәте йүнәлешендә аныҡ һәм даими эшмәкәрлек алып барыуы республиканың башҡа ҡала һәм райондарына ҙур өлгө булып тороролоҡ. Хатта баш ҡаланы был йәһәттән уңышлы эшләүсе берҙән-бер ҡала тип атарға ла мөмкин. Белем биреү усаҡтарында дәүләт һәм туған телдәрҙе уҡытыу бында күптән яйға һалынған, телдәрҙе үҫтереү һәм камиллаштырыу йәһәтенән уҡыу процесына төрлө белем биреү программалары индерелә, конкурстар, фестивалдәр, семинарҙар, байрамдар үткәрелә. Һис шикһеҙ, мәҙәни, социаль әһәмиәтле программаларҙы тормошҡа ашырыуҙа был премияға лайыҡ булыусыларҙың да роле бик ҙур. Быйылғы лауреаттар араһында Башҡорт дәүләт университеты профессоры Закирйәнов Ҡәбир Закирйән улы, журналист, "Йәншишмә" гәзитенең әҙәбиәт һәм сәнғәт бүлеге етәксеһе Зөһрә Сәлимйән ҡыҙы Ҡотлогилдина кеүек үҙ һөнәренә оҙаҡ йылдар тоғро хеҙмәт итеүселәрҙең дә булыуы туған тел һағында тороусылар сафтарының ныҡлығын тағы бер раҫланы. Орджоникидзе районы 109-сы мәктәптең Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте уҡытыусыһы Иван Николаевич Бессонов инһә, туған тел, шулай уҡ Башҡортостан тарихы һәм мәҙәниәте дәрестәренең йәш быуында ватансылыҡ тойғоларын тәрбиәләүҙә мөһим роль уйнауын билдәләп, был дәрестәрҙең уҡыу программаларынан бөтөнләй төшөп ҡалыу хәүефе янауына борсолоуын белдерҙе.

"Һеҙ һәр халыҡтың төп байлығы - туған телен һаҡлау бурысына тоғро ҡалыуығыҙ, республика халыҡтарының рухи мәҙәниәтен һаҡлау һәм үҫтереүгә үҙ өлөшөгөҙҙө индереүегеҙ менән генә лә оло маҡтауға лайыҡһығыҙ", - тип билдәләгәйне үҙенең ҡотлау һүҙендә ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Биктимер улы Баязитов. Ысынлап та, йөрәгеңдә үҙең йәшәгән ергә, илгә, туған теленә һөйөү тойғолары йөрөткәндә генә Өфө милли республиканың баш ҡалаһы булараҡ үҙ йөҙөн юғалтмаҫ, тағы ла күберәк ватансыл йәштәр үҫеп етер. Иң мөһиме, ошо хистәребеҙ тупаҫланмаһын.

Әйткәндәй, туған телдәрҙе үҫтереү һәм пропагандалау өлкәһендәге хеҙмәттәре өсөн Өфө ҡала хакимиәте башлығы премияһына лайыҡ булыусылар араһында хеҙмәттәшебеҙ Ләйсән Нафиҡова ла бар. Уны, шулай уҡ хеҙмәттәре ошо премия менән баһаланған башҡа телһөйәрҙәрҙе ихлас ҡотлайбыҙ һәм ижади эштәрендә уңыштар теләйбеҙ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

ЫЛАУ КИТТЕ

Монгол Халыҡ республикаһының ауыл хужалығы министрлығы быйыл йәй Башҡортостан Ҡортсолоҡ һәм апитерапия буйынса фәнни-тикшеренеү үҙәге менән бал ҡорттары күстәре һатып алыу буйынса килешеү төҙөгәйне. Ошо көндәрҙә Өфөнән Улан Батырға 12 тонналыҡ 4 йөк автомашинаһынан торған каруан юлланды.

Үҙәк директоры Әмир Ишемғолов әйтеүенсә, Монголия менән килешеү төҙөгәндә бал ҡорттарының ҡырыҫ монгол климаты шарттарына яраҡлашыуы, һәйбәт үрсеүе һәм төрлө ауырыуҙарға бирешмәүе төп талаптар булараҡ билдәләнгән. "Был йәһәттән башҡорт бал ҡорттарына етеүсе табылмаған. Әйткәндәй, беҙ Монгол Халыҡ республикаһына быға тиклем ике тапҡыр ылау ебәргәйнек. Асыҡланыуынса, беҙҙең ҡорттар монгол ҡорттарынан тиҙерәк тә үрсей икән", - тине Әмир Миңлеәхмәт улы.

Ул шулай уҡ нисә күс, күпме умарта, нисә инә ҡорт әҙерләнеүе, уларҙы ниндәй ойошмалар әҙерләүе тураһында ла бәйән итте: бөтәһе 800 күс, башҡорт тоҡомло, үрсем биреүгә һәләтле 500 инә ҡорт, шулай уҡ, 10 рамалы 800 күп корпуслы умарта оҙатылған. Башҡорт бал ҡорттары быйыл ҙур күләмдә Башҡортостандан ситкә сығарылғаны булмаған. Күстәрҙе Башҡортостандың 11 хужалығы етештергән. Уларҙы "Ейәнсура" (400 күс), "Архангел" (200 күс), "Нуриман" (200 күс) фәнни тикшеренеү станцияларында тәрбиәләгәндәр, юлға әҙерләгәндәр.

КЕМ ӨЛӨШӨНӘ ТӨШӨР?

Ошо көндәрҙә Өфөгә Швейцарияның Лозанна ҡалаһынан Бөтөн донъя уйындары халыҡ-ара ассоциацияһы вәкилдәре килде. Улар Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министр урынбаҫары Салауат Сәғитов рәйеслегендә үткән ултырышта ҡатнашты һәм 2021 йылда үтәсәк уйындарҙы Өфөлә уҙғарыу буйынса фекер алышты. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ: был уйындарҙы үҙҙәрендә үткәреүгә әлегә өс ҡала: Өфө, Американың Алабама штатына ҡараған Бермингем ҡалаһы һәм Перуҙың баш ҡалаһы Лима дәғүә итә.

Техник комиссия ағзалары Өфө тураһында отчет эшләгәс, ҡалған ике ҡалаға юлланасаҡ. Бөтөн донъя уйындары халыҡ-ара ассоциацияһы вице-президенты Макс Бишоп әйтеүенсә, улар Өфөләге спорт объекттарының 2021 йылда үтәсәк уйындарға индерелгән спорт төрҙәрен уҙғарыу буйынса халыҡ-ара стандарттарға тап килеү-килмәүен тикшергән.

- Өфөнөң спорт ҡоролмаларын ҡарағандан һуң, уларҙы яҡшы кимәлдә, тип баһаларға булалыр. Ойошторoу йәһәтенән әллә ни ҙур етешһеҙлектәр осраманы. Әгәр Өфө был Уйындарҙы үҙендә үткәреү хоҡуғын яулаһа, ул етешһеҙлектәрҙе бөтөрөү өсөн дә ваҡыт буласаҡ әле. Ҡалған ике ҡала менән сағыштырғанда, бында республика Хөкүмәте командаһы һәм Ойошторoу комитеты бик әүҙем эшләгәне күренә, - тине Бөтөн донъя уйындары халыҡ-ара ассоциацияһы комиссияһы вәкиле Бишоп.

ЙОМҒАҠЛАП...

Комиссия ағзаларын Өфө һауаһының, урамдарының таҙалығы, йорттарҙың матурлығы, күп ерҙәрҙә төҙөлөш барыуы, тығындарҙың аҙ булыуы һоҡландырған. Профессиональ йәһәттән, белгестәр әйтеүенсә, Өфө тарафынан әҙерләнгән ғариза бик яҡшы кимәлдә эшләнгән. Уны тикшергәндән һуң, әлеге комиссия киләһе йылдың ғинуар аҙаҡтарында үҙенең ҡарары тураһында хәбәр итәсәк.

Илгиз ИШБУЛАТОВ.

Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Баш ҡала юлдарында "Юл приставы" аппарат-программа комплексы әүҙем эш башланы. Был система автоматик режимда юлдарҙағы автомобилдәрҙең номерҙарын приставтар хеҙмәтенең мәғлүмәт базаһы буйынса тикшерә һәм уларҙың штрафтар буйынса бурысы бармы-юҡмы икәнен асыҡлай. Бурысы булыуы асыҡланған автомобилде ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре туҡтатҡандан һуң, суд приставтары уларҙың хужаларына урында уҡ бурыстарын түләтеү мөмкинлеге бирә.

✓"Иммунопрепарат" предприятиеһы терәк-хәрәкәт ағзалары ауырыуҙарын дауалаусы "Хондролон-Про" тип исемләнгән яңы дарыу эшләп сығарҙы. Препарат клиникаға тиклемге һынауҙарҙы уңышлы үткән, оҙаҡламай уны клиникала һынауҙар башланасаҡ. Белгестәр хәбәр итеүенсә, ул 2016 йыл аҙағында һатыуға сығарыласаҡ һәм сит илдән индерелгән ошоға оҡшаш дарыуҙарҙан тулыһынса баш тартыу мөмкинлеге бирәсәк.

✓Быйылғы йыл башынан Башҡортостанда файҙалы ҡаҙылмаларҙы законһыҙ сығарыуҙың 157 осрағы асыҡланған һәм уны ойоштorған ойошмаларға әйләнә-тирә мөхиткә зыян иткән өсөн 141 миллион һумға яҡын штраф һалынған. Мәҫәлән, октябрь башында БР Юғары суды тарафынан Архангел районында законһыҙ рәүештә ҡыҙыл балсыҡ сығарған "Ремдорстрой" ойошмаһы эше ҡаралды һәм уларға 90 мең һум штраф һалырға тигән ҡарар сығарҙы.

✓Эстонияның Таллин ҡалаһында Халыҡ-ара шашка буйынса Европа чемпионаты тамамланды. Ярышыусылар исемлегендә 96 ир-егет, 53 ҡатынҡыҙ теркәлгәйне. Улар иҫәбенә Башҡортостандан 10 шашкасы ла инде һәм улар дүрт алтын, бер көмөш миҙал яуланы. Тамара Таныҡкужина һәм Айгөл Изрисова алтын миҙал яулап, Европа чемпионы титулына лайыҡ булды.

✓17 октябрҙә иртәнге сәғәт 10-да Өфөлә Мостай Кәрим һәйкәле янында шағирҙың 95 йыллығын арналған Халыҡ-ара әҙәбиәт фестивале үтәсәк. Унда яҙыусылар, студенттар һәм уҡыусылар ҡатнашасаҡ. Мостай Кәримдең шиғырҙары ете телдә яңғыраясаҡ. Һуңынан байрам Республика Һуҡырҙар өсөн махсус китапхана бинаһында дауам итәсәк.

ТЫУҒАН РЕСПУБЛИКАБЫҘҘЫҢ...

тарихы һәм үҙ Президенты, гербы, флагы, гимны бар

Бөгөн, 11 октябрҙә, Республика көнөн байрам итәбеҙ. Был байрам тураһында һин нимә беләһең, уҡыусым? Иҫкә төшөрәйек.

Башҡортостан Республикаһы - I Бөтә Башҡорт Ҡоролтайы (1917, июль) тарафынан һайланған Башҡорт мәркәз шураһы 1917 йылдың 15 ноябрендә Ырымбур, Өфө, Пермь, Һамар губерналарындағы башҡорт территорияларын Рәсәй Республикаһының автономиялы өлөшө тип иғлан итә. Шураның ҡарары III Бөтә Башҡорт Ҡоролтайы тарафынан раҫлана (1917, 8 декабрь). 1919 йылдың 23 мартында Үҙәк Совет власы менән Башҡорт хөкүмәте араһында Башҡорт Совет автономияһы тураһындағы Килешеү нигеҙендә Башҡорт Автономиялы Совет Социалистик Республикаһы иғлан ителә. 1990 йылдың 11 октябрендә Башҡортостан Совет Социалистик Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителә. 1992 йылдан алып Башҡортостан Республикаһы тип йөрөтөлә башлай.

Башҡортостан Республикаһы Президенты - Башҡортостан Республикаһының иң юғары вазифалы етәксеһе.

Башҡортостан Республикаһы Президенты Рәсәй Федерацияһы Президенты, Федерация Советы һәм Рәсәй Федерацияһы Федераль Йыйылышы Дәүләт Думаһы, Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәте, башҡа федераль дәүләт власы органдары, Рәсәй Федерацияһы субъекттарының дәүләт власы органдары, Башҡортостан Республикаһының дәүләт власы органдары, урындағы үҙидара органдары, йәмәғәт берләшмәләре, башҡа ойошмалар һәм вазифалы кешеләр менән мөнәсәбәттәрҙә, шул иҫәптән халыҡ-ара һәм тышҡы иҡтисади бәйләнештәр алып барғанда, Башҡортостан Республикаһы исеменән сығыш яһай. Башҡортостан Республикаһының беренсе Президенты - Рәхимов Мортаза Ғөбәйҙулла улы, 1993 йылдың 12 декабренән 2010 йылдың 15 июленә тиклем юғары вазифа башҡара. Башҡортостан Республикаһының ғәмәлдәге Президенты - Хәмитов Рөстәм Зәки улы, 2010 йылдың 19 июленән юғары вазифала.

Башҡортостан Республикаһының символдары

Башҡортостан Республикаһының дәүләт гербы 1993 йылдың 12 октябрендә раҫлана. Авторы - рәссам Фазлетдин Ислахов. Герб милли биҙәк менән уратып алынған түңәрәк эсендәге Салауат Юлаев һәйкәле һүрәтенән тора. Һәйкәлде сығып килгән ҡояш нурҙары балҡыта. Һәйкәлдең аҫтында - ҡурай сәскәһе, флаг төҫтәренә буялған таҫма, уның аҡ төҫлөһөнә "Башҡортостан" тип яҙылған.

Башҡортостан Республикаһы флагы. Башҡортостан флагы тарихы быуаттар төпкөлөнә барып тоташа.

XIX быуат. Даими хәрби хеҙмәттә булған башҡорт халҡының милли символы итеп иҫәпләнгән байраҡ тураһында тулы булмаған мәғлүмәт бирҙәле. Ул саҡтағы байраҡ ике башлы сәмреғош һәм уның тирәләй һибелгән алты мөйөшлө йондоҙҙар өҫтөндә Ҡөрьән аяты яҙылған булған.

1918 йыл. Башҡортостан дәүләт флагы тарихы 1918 йылдың 20 август көнөнән башлана. Башҡорт хөкүмәте фарманы менән был көндө башҡорт милли флагы раҫлана. Башҡорт милли флагы төҙөлөшө буйынса 1918 йылға тиклем булған Рәсәй Дәүләт флагын ҡабатлай, төҫтәр айырмалығы менән үҙенсәлекле була. Башҡорт милли флагы зәңгәр, йәшел һәм аҡ төҫтәге өс буй һыҙаттан тора. Флагтың өҫкө һыҙаты күк төҫтә булып, башҡорттарҙың төрки халыҡтарға ҡарауын, урталағы йәшел төҫлө һыҙат - башҡорт халҡының Ислам дине ҡанундарына буйһоноуын, аҫтағы аҡ буй төҫлө һыҙат - Башҡортостан халыҡтарының элек-электән тыныслыҡҡа, именлеккә һәм бәхеткә ынтылыуын аңлата.

1924 йыл. Башҡорт Совет Автономияһы төҙөлөүү сәбәпле, 1918 йылда Башҡорт хөкүмәте тарафынан ҡабул ителгән милли флаг ғәмәлдән сығарыла. Башҡортостандың Үҙәк башҡарма комитеты ҡарары менән 1924 йылдың 11 октябрендә дәүләт флагы раҫлана. Дәүләт флагы итеп ҡыҙыл төҫтәге туҡыма алына, уның өҫкө мөйөшөндә, флаг һабы эргәһендә алтын ураҡ һәм сүкеш, улар аҫтында алтын ҡайма менән уратылған ҡыҙыл йондоҙ һүрәтләнә.

1938 йылдың февралендә Башҡорт АССР-ы дәүләт флагына үҙгәреш индерелә. Уның өҫкө һул мөйөшөнә, флаг һабы эргәһендә, "РСФСР" һәм бәләкәйерәк хәрефле "Башкирская АССР" яҙыуҙары өҫтәлә.

1954 йыл. РСФСР Дәүләт флагы үҙгәреү сәбәпле, Башҡорт АССР-ы дәүләт флагы ла үҙгәртелә. Флаг һабы яны буйлап флагтың бөтә иңенә асыҡ зәңгәр төҫтәге һыҙат өҫтәлә. Шул килеш флаг 90-сы йылдарға тиклем ҡулланыла.

1992 йыл. Рәсәй һәм Башҡортостан дәүләтселеге яңыртылыуы сәбәпле, дәүләт символдары ла үҙгәртелә. 1990 йылдың 11 октябрендә Юғары Совет тарафынан Башҡортостан Республикаһының Дәүләт суверенитеты тураһында декларация ҡабул ителә. 1990 йылдың 26 ноябрендә Башҡортостан Республикаһының Министрҙар Кабинеты "Башҡортостан Республикаһының флагы, гербы һәм гимнына иң яҡшы проектҡа конкурс үткәреү тураһында" 211-се ҡарарын ҡабул итә. Конкурс комиссияһында ижади берләшмәләре, профессиональ рәссамдар, композиторҙар, уҡытыусылар, вуз студенттары, дәүләт һәм йәмәғәт эшмәкәрҙәре тәҡдим иткән ҡырҡҡа яҡын дәүләт атрибуттары проекты ҡарала. Башҡортостан Республикаһының дәүләт флагы итеп рәссамдар Урал Мәсәлимов һәм Ольга Асабина тәҡдим икән флаг һайлана һәм Башҡортостан Республикаһының Юғары Советы 1992 йылдың 25 февралендә республиканың яңы дәүләт флагын раҫлай. Дәүләт флагында зәңгәр, аҡ һәм йәшел төҫөндәге горизонталь тигеҙ буйлы һыҙаттар, уртаһында һары түңәрәк эсендә һары төҫтәге ҡурай сәскәһе төшөрөлгән. Зәңгәр төҫ күк йөҙөн, ғәҙеллекте һәм уй-ниәттәренең сафлығын аңлата. Аҡ төҫ - республика халыҡтарының тыныслыҡты һәм татыулыҡты һөйөүен белдерә. Йәшел төҫ - азатлыҡ һәм тормоштоң мәңгелеген билдәләй. Ҡурай сәскәһе - дуҫлыҡ символы.

Башҡортостан Республикаһының дәүләт гимны

Рауил Бикбаев, Рәшит Шәкүр һүҙҙәре.
Фәрит Изрисов музыкаһы.

Башҡортостан, һин һөйөклө ғәзиз ер,
Халҡыбыҙҙың изге Ватаны.
Сал Уралдан ҡалҡа бар тарафҡа
Тыуған илдең тыныс ал таңы.

Ҡушымта:
Дан һиңә, Башҡортостан!
Илен һөйгән азат халҡыма дан!
Рәсәй менән бөйөк берҙәмлектә
Сәскә ат, Башҡортостан!

Башҡортостан, һин хөрмәтле данлы ил,
Еңеү яулап алға барабыҙ.
Киләсәккә яҡты нур-моң сәсә
Һинең ғорур рухлы байрағың.

Республикам, йондоҙ булып балҡы һин,
Күкрәп йәшә, гүзәл илебеҙ.
Тыуған ерҙә һүнмәҫ усағыбыҙ,
Туған телдә тынмаҫ йырыбыҙ.

ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ

Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.

Балан

Балан дөйөм нығытыусы сифатҡа эйә, шуға ла ул йөрәк һәм ҡан тамырҙары ауырыуҙарын дауалауҙа ҡулланыла.

❖ **балан-сөгөлдөр кеүәҫе.** 1 кг балан, 1 кг сөгөлдөр, 1 стакан шәкәр йәки бал, 3 л һыу алырға. Сөгөлдөрҙө ҡырғыстан үткәрергә, 1 л һыу ҡойорға һәм бешерергә. Баланды йыуырға, 1 л һыуға һалып, бер аҙ ҡайнатып алырға. Икеһен бергә ҡушып, шәкәр өҫтәргә, тағы бер тапҡыр ҡайнатып сығарырға. Һыуығас, әҙер кеҫәлде һалҡын урында һаҡлайҙар, һалҡын көйө эсеү тәмлерәк. Ҡан тамырҙарын киңәйтеүсе сара булараҡ ҡулланыла.

❖ **баландан төнәтмә.** 15-20 г балан емешенә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Өс өлөшкә бүлеп, көнө буйы эсергә. Йөрәк ауыртҡанда файҙалы.

❖ **баллы балан һуты.** 1 кг балан, 200 г шәкәр, 200 г һыу, 2 ҡалаҡ бал. Балан һутын һығып алғас, һөйәктәренә һыу ҡойоп, 50-10 минут ҡайнатырға, һөҙөргә. Уға балан һутын, шәкәр өҫтәп болғарға ла, һыуытырға. Килеп сыҡҡан һутҡа бал өҫтәргә. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 1-2 ҡалаҡ эсергә. Юғары ҡан баҫымынан дауалай.

❖ **еләк менән балан төнәтмәһе.** 2 ҡалаҡ киптерелгән балан емеше, 4 ҡалаҡ киптерелгән энәлек емеше, 4 ҡалаҡ һары умырзая үләне (адонис), 2 ҡалаҡ ҡандала үләне (донник), 6 ҡалаҡ киптерелгән еләк, 2 стакан һыу. Еләктәрҙе һәм үләндәрҙе бергә ҡушып болғатырға. 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 стакан һалҡын һыу ҡойорға һәм 6 сәғәт төнәтергә. Һөҙөргә һәм 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә. 30 минут ҡайнап ултырған һыулы һауытта торға, ҡайнатмаҫҡа. Көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 120 мл эсергә.

❖ **бөйөр ауырыуҙарынан.** 1 ҡалаҡ киптерелгән балан емеше менән 1 ҡалаҡ киптерелгән ҡайын бөрөһөнә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Көнөнә 1 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда эсергә. Дауаланыу курсы - 10-15 көн.

❖ **бронхит һәм бронхиаль астманан.** 200 г балан һуты, 200 г кишер һуты, 200 г алоэ һутын бергә ҡушып, һыуытҡыста һаҡларға. 7 көн дауамында 3-әр стакан ошо һутты эсергә кәрәк. Бер нисә көн ял иткәндән һуң, тағы ҡабатларға.

Айбикә ЯҠУПОВА.

ЙОЛАЛАРЫБЫҘ

АЙ ҘА ҠАЙТА...

көн дә ҡайта

Башҡорттарҙың туҡланыу рационында йәшелсәләрҙең ярайһы һуң барлыҡҡа килеүенә ҡарамаҫтан, XIX быуатта улар халыҡ дауаһында уңышлы ҡулланылған. Д. Никольский билдәләүенсә, ҡара торма һуты һәм бешкән картуфты зәңге ауырыуынан ҡулланғандар, миҙгел сирҙәренән һаҡланыу өсөн һуған менән һарымһаҡ сәйнәгәндәр, улар уҡ теш һыҙлағанда ла ярҙам иткән.

Һарымһаҡ яуыз көстәрҙән һаҡлаусы сара ла булып торған, Дим буйында йәшәгән башҡорттар уртаға ҡырҡылған һарымһаҡ менән йорт хайуандарының маңлайына ярым ай һүрәте төшөргән. Һыҙлаған быуындарға сей картуф бәйләп, аҙаҡтан уны ергә күмеп ҡуйғандар. Шулай уҡ ҡолағы ауыртҡан кешегә - хайуандың ҡолағын, йөрәге ауыртҡанға - йөрәген һ.б. ашатыу күренеше булған. Таулы-урманлы райондарҙа йәшәүселәр аяғы һыҙлаған кешегә айыуҙың аяғын бешереп ашатҡан. Эре малдың йөрәген ашағандар ҡыйыу һәм сәләмәт йөрәкле була, тип ышанғандар. Ауырлы ҡатындарға ҡуян ите (китек ирен булмаһын өсөн), балыҡ (бала телһеҙ булмаһын өсөн) ашау тыйылған. Бала башын насар тотһа, һарыҡ башын муйыны менән бергә бешереп ашағандар. Баш һөйәген ишек башына элгәндәр. Һарыҡ башы кибеп, ҡатһа, баланың муйыны ла нығына. Ошо уҡ маҡсатта ауырлы һәм бала тапҡан ҡатындарға һарыҡтың муйын өлөшөн бешереп, һурпаһын эсергәндәр.

Һары ауырыуын - һары төҫтәге үҫемлектәр һәм ризыҡтар - йомортҡа һарыһы, кишер, һары төҫтәге балыҡ, лимон, һоло төнәтмәһе, һары мәтрүшкә, көнбағыш сәскәләре, ҡыҙылсаны - ҡыҙыл төҫтәге ризыҡтар - һыуға болғанған еләк-емештәр, әсе ҡымыҙ йәки күкрәк һөтө менән дауалайҙар. Ҡайһы саҡта ҡыҙылса менән ауырыған кешенең тәнен ҡыҙыл әтәстең ҡаны менән ыуалар. Ҡыҙылса мәлендә баланың беләҙегенә өс ҡыҙыл сепрәк бәйләйҙәр, һуңынан икмәк бешереп, уны йылы көйөнә берәй ҡарсыҡҡа хәйер итеп бирәләр. Күҙгә арпа сыҡҡанда ауыртҡан күҙгә арпа һалып, былай тип имләйҙәр:

Ни имләйһең? Арпа имләйем.
Ни төртәһең? Арпа төртәм.
Ай ҙа ҡайта, Көн дә ҡайта,
Һин дә ҡайт. Кит! Кит!

Арпаны дауалау өсөн 41 арпа бөртөгө алып, улар менән күҙгә еңелсә генә ҡағылып, һамаҡларға кәрәк:

Кит, кит, кит, арпа,
Минән эткә кит, арпа...

Һуңынан был арпаларҙы эткә ташлайҙар.

Ҡайһы саҡта таҡ һандағы тары ярмаһын йола үткәргәндән һуң тауыҡ тиҙәгенә йәки утҡа ташлағандар. Бағымсылыҡта 3, 7, 9, 41 һандарына айырыуса мәғәнә бирелгән.

Эльза МИҺРАНОВА.
"Башҡорттарҙың традицион туҡланыу системаһы" китабынан.
(Дауамы бар).

ХЕҘМӘТ ҺАБАҠТАРЫ

Эшҡыуарлыҡҡа кеше төрлөсә килә. Кемдәлер бала саҡтан эшҡыуарлыҡ һыҙаттары ярылып ята һәм, иртәме-һуңмы, улар ошо йүнәлеште үҙ итә. Икенселәр урау юлдар үтеп, бихисап эш урыны алыштырып та, уларҙан ҡәнәғәтләнеү тапмағандан эшҡыуарлыҡ арбаһына "ултыра". Ҡайһы берәүҙәрҙе был аҙымға ниндәйҙер танышының уңышлы эшмәкәрлеген күреү һәм уның кеүек үк уңышҡа өлгәшеү теләге этәрә. Шулай уҡ эшҡыуарҙар араһында атаһы өлгөһөнә эйәреп, уның юлын дауам итеүселәр ҙә бихисап. Бөгөнгө ҡунағыбыҙ, "Азамат" асыҡ акционерҙар йәмғиәте директоры Руслан ШАҺЫБАЛОВ, нәҡ атаһының еңел ҡулы менән ошо өлкәгә килә һәм әлеге ваҡытта уңышлы эшмәкәрлек алып бара. Уның менән эшҡыуарлыҡ нигеҙҙәре тураһында әңгәмә ҡорҙоҡ.

АТАЙЫМ ӨЛГӨҺӨНДӘ...

үҙ эшемде ҡорҙом

- Әбйәлил районы Амангилде ауылында тыуып үҫтем. Бәхет эҙләп, уңыш артынан ҡыуып, сит тарафтарға китмәнем, ә ғаилә ҡороп, үҙемдең тыуған төйәгемдә төпләндем. Тормоштан ҡәнәғәт булыр өсөн кешегә күп кәрәкмәй, минеңсә. Атай-әсәй, туғандар, ғаилә, дуҫтар-таныштар иҫәнлеге-именлеге һәм донъяларҙың тыныс тороуы үҙе бәхет түгелме ни? Шуға күрә, тормошҡа артыҡ ҙур талаптар ҡуймайынса, барыһына шөкөр итеп, һәр яңы көнгә ҡыуанып йәшәйем. Ә яратҡан, күңел биреп башҡарған эшемдең булыуы бәхетемде тағы ла нығыраҡ тулыландыра һәм йәшәйешемде әһәмиәтлерәк итә.

Эшҡыуарлыҡҡа 2000 йылда, милициялағы хеҙмәтемде ҡалдырып, атайымдың саҡырыуы буйынса килдем һәм бына 14 йыл ағас эшкәртеү өлкәһендә эшләйем. Дөрөҫөн әйткәндә, ҡыйыуһыҙ ғына ишек шаҡыным, ләкин атайымдың һәр саҡ янымда булыуы миңә ышаныс бирҙе. Уның төплө, урынлы һәм файҙалы кәңәштәре эшмәкәрлегемә еңеллек килтерҙе, миңә рухи көс өҫтәне, һәр башланғысымды хуплап-яҡлап тороуы аҙымдарымды нығытты. Әлеге ваҡытта ла ҙур эш башлар алдынан уның менән кәңәшләшәм, һүҙенә ҡолаҡ һалам.

Бөгөн ағас эше менән булған эшҡыуарҙар күп. Улар араһында юғалып ҡалмаҫ өсөн тырышырға һәм ҙур көс һалырға кәрәк. Бының өсөн бар шарттарҙы ла дөрөҫ ҡуллана белергә өйрәнеү мөһим. Ағас алып, бура күтәрҙең дә - эш бөттө, тип ултырырға ярамай. Бындай ҡараш менән юғары үрҙәр яулап булмай. Бураны һатып ебәреү өсөн дә йоҡлап ятмаҫҡа, йүгерергә, сос булырға, тырышырға кәрәк. Реклама өҫтөндә күп эшләү яҡшы һөҙөмтә бирә. Бының өсөн хәҙер саралар күп - гәзит-журналдарҙа ла, интернет селтәрендә лә йәки башҡа төрлө лә клиенттарға тейешле мәғлүмәтте еткерергә була. Тағы ла бер мөһим момент - һәр структурала ла бәйләнештәрҙең булыуы эште күпкә еңеләйтә. Шуға күрә, төрлө өлкәлә танышлыҡ булдырыу һәм уларҙы оҫта файҙаланырға өйрәнеү мөһим.

Һәр башлаған эшемә оло яуаплылыҡ менән ҡарайым, сөнки был сифат уңышҡа өлгәшеүҙең нигеҙе, тип һанайым. Шулай уҡ эшҡыуарлыҡта бәләкәй һәм ҙур, әһәмиәтһеҙ һәм ваҡ әйберҙәр юҡлығын, был өлкәлә бар нәмә лә мөһим икәнлеген аңлау ҙа яҡшы һөҙөмтәгә өлгәшергә булышлыҡ итә. Ғөмүмән, ошо хәҡиҡәтте аңламай тороп, эште алға ебәреүе мөмкин түгел. Тәү ҡарашҡа бәләкәй генә булып күренгән әйбер ҙә дөйөм йомғаҡ өсөн ғәйәт ҙур әһәмиәткә эйә булыуы бар. Шуға күрә һәр осраҡҡа, һәр әйбергә иғтибарлы булыу һәм бер нәмәне лә күҙ уңынан ысҡындырмау - эшҡыуарҙың төп ҡағиҙәләренең береһе булырға тейеш.

Эшҡыуарлыҡта мине иң ылыҡтырғаны - һәр аҙымыңды ныҡлы уйлай белеү, килеп тыуған көтөлмәгәнлектәрҙе аҡыл менән йырып сыға алыу мөһимлеге, тип әйтер инем. Шулай уҡ кеше менән эшләй белеү ҙә ҙур әһәмиәткә эйә. Бригадамда эшләүселәр һәм заказ биреүселәр менән алдауһыҙ, мутлашыуһыҙ эш итәм. Кешене бер тапҡыр алдарһың, бәлки, үтеп тә китер, ләкин икенсе мәртәбә ул һинең менән эш итеү түгел, һинең яғыңа боролоп та ҡарамаясаҡ. Был осраҡта халыҡ араһында шәп эшләгән "сарафан" радиоһы тулҡындарында алдаҡсы эшҡыуар хаҡында хәбәр тиҙ таралаҫаҡ. Ә был, үҙ сиратында, заказдар һанына, ярашлы рәүештә, килемгә лә тәьҫир итә. Үҙ һүҙендә тормаған кешегә эшләргә теләүселәр ҙә кәмәйәсәк, ә ағас эшкәртеү менән булғанда эшселәрһеҙ - тере ҡулһыҙ кеүек. Шуға күрә, намыҫлы эшләйем һәм эшселәрҙе лә, заказ биреүселәрҙе лә ҡыйын хәлгә ҡуймайым. Әлеге ваҡытта егерменән артыҡ эшсем бар. Уларҙың күбеһе ауылдаштарым һәм күрше ауылдыҡылар. Ҡулдары оҫта, үҙ эштәренә яуаплы ҡараған, эш нескәлектәрен яҡшы белгән кешеләр менән эш итеүе еңел һәм ҡулай. Уларҙың эштәренән ризамын һәм артабан да бергә эшләрбеҙ, тип ышанам.

Бөтә эш тә сифат ярата. Ә ағас эшкәртеүгә, бура бурауға тотонғанның икән, сифат хаҡында бер минутҡа ла оноторға ярамай. Һәр бер "ҡыйыш" һалынған ағас абруйға тап төшөрә, килемде түбәнәйтә. Хәҙер күптәр ҡоро бура эшләүгә генә түгел, ә шулай уҡ уны алып барыуға ла, күтәреүгә лә, ғөмүмән, "под ключ" тапшырыуға заказ бирә. Шуға күрә, ағас сығарғандағы, бура күтәргәндәге һәр етешһеҙлек күҙгә ташланып, күренеп тора. Нимәнелер һүтеп, яңынан төҙөүгә ҡарағанда, эште тәүҙән үк сифатлы башҡарыу ваҡытты ла, көстө лә һаҡлай. Әлеге мәлдә айына яҡынса 10-ар бура күтәрәбеҙ. Күберәген Магнитогорск, Силәбе, Өфө ҡалаларынан, шулай уҡ райондың төрлө ауылдарынан заказдар алам. Улар араһында өй, мунса буралары бар. Шулай уҡ беседкалар эшләүгә лә күп заказдар килә. Ғөмүмән, эш етерлек, тик йыбанма ғына. Һаулыҡ, теләк һәм тырышлыҡ булһа, барыһына ла өлгөрөргә мөмкин.

Һәр кем балаларының киләсәгән тәьмин итеү өсөн тырыша. Минең дә маҡсаттарым ошо изге ниәткә барып тоташа. Әле мөмкинлек булғанда эшләргә һәм эшҡыуарлығымды киңәйтергә иҫәп тотам. Балалар ҙурайғас, эшҡыуарлыҡ дилбегәһен уларға тоторасаҡмын.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Оҙон юлды үтеү өсөн тәүге аҙымды эшләрлек теләк, көс һәм ынтылыш кәрәк, тиҙәр. Был фекерҙе ҡайһы саҡ кемдеңдер ваҡытында әйтелгән кәңәше, күрһәткән һуҡмағы кешегә тормошта үҙ урынын табырға ярҙам итә, тип тулыландырыу урынлы булыр. Бөгөнгө ҡунағыбыҙға нәҡ ошондай бәхетле өлөш тейгән. Ул уны тейешенсә файҙаланған һәм уңышҡа өлгәшкән. Шуның менән отҡан.

Гөлназ САФУАНОВА.

АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ

АЛҒАНДА - ҺАНДУҒАС...

биргәндә илаҡас

- Үтә баҫып - япраҡты, иҙә баҫып тупраҡты илатма.
- Шатлыҡ йәше - ынйыға, ҡайғыныҡы ҡара ҡурғашҡа тиң.
- Күп ләститтән - ҡаймаҡ, күп ғәйбәттән май сыҡмаҫ.
- Эшеңде ихлас башҡар - уңышҡа ирешерһең, ҡаршылыҡтар ҙа аҙ булыр.
- Көсөң етмәгән эштең дә башҡарыу таһылын бел - башҡаларға өйрәтерһең.
- Машиналы "ярлы" юлланғансы, "атлы бай" юл үтә.
- Хәйләле тормош кәйлә күтәртә, намыҫлыһы ҙур йөк йөкмәтә.
- Биргән һайын кеҫә һайыға, алған һайын күҙ йүгерә.
- Һарандың булмышы: алғанда - һандуғас, биргәндә - илаҡас.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

БАШҠОРТОСТАНЫБЫҘ...

Беренсе донъя һуғышы осоронда

Тарих фәндәре кандидаты, Рәсәй Стратегик тикшеренеүҙәр институты өлкән хеҙмәткәре Рәмил Насибулла улы Рәхимов Беренсе донъя һуғышы осорондағы Башҡортостан менән таныштырыуын дауам итә.

Көтөлмәгән яңылыҡ

Һуғышҡа ингән дәүләттәрҙең бөтәһе лә элек булған һуғыштарға ҡарап фекер йөрөтә. Франция-Рәсәй йәки Рус-япон һуғыштары улар өсөн өлгө итеп алына. Ул һуғыштар маневрлы була, алыштар бер-ике йыл эсендә тамамлана. Был юлы ла ил башлыҡтары, хәрби етәкселәр һуғыштың тиҙ бөтәсәгенә ышана. 1914 йылдың 1 августында һалдаттарын яуға оҙатҡанда Германия императоры, Яңы йылды Парижда ҡаршылаясаҡбыҙ, ти. Французлар иһә, Яңы йылды Берлинда ҡаршылаясаҡтарына ышана, рустар ҙа Яңы йылға Берлинға инергә өмөтләнә. Бөтәһе лә һуғыш тиҙ бөтәсәк, тип уйлай. Ләкин улар хаталана, был ваҡытта ҙур тиҙлек менән үҫкән фәнни-техник прогресты күҙ уңынан ысҡындыра. Ә ул осорҙа бер-бер артлы фәнни асыштар эшләнә һәм, ғәҙәттәгесә, был асыштар ҙа хәрби эштә әүҙем ҡулланыла.

Һөжүм итеү саралары һаҡланыуараларына ҡарағанда насарыраҡ үҫешкән була. Оборона тотоусылар һөжүм итеп килеүсе дошмандарҙың бер-ике полкын ярты сәғәт эсендә пулеметтан ҡырып һала ала. Бынан тыш, армия ауыр артиллерия ҡоралдары, 260 мм-лы снарядтар, гаубицалар ала. Был ҡоралдар дошманды ҙур емертеүҙәр менән туҡтата. Һуғышта әүҙем рәүештә аэропландар ҡулланыла башлай. Газ ҡоралдары барлыҡҡа килә, был ҡорал бер нисә минут эсендә дивизияларҙы юҡҡа сығарыу көсөнә эйә була.

1915 йылдың башында уҡ һуғыштың Әле генә бөтмәйәсәге, хәрби бәрелештәрҙең теге йәки был яҡтың хәрби, иҡтисади, кеше ресурстары бөткәнсе барасағы асыҡлана. 10-15 саҡрымға алға китеү ҙур уңыш тип һанала. Ғәскәрҙәр ерҙә нығыраҡ ҡаҙына башлай, бер нисә кимәлле окоптар, ер аҫты ҡоролмалары эшләнә. Фронтты йырыр өсөн яңы ысулдар эҙләргә кәрәк була.

Фронттағы хәлдәр

Һуғыш домино принцибы буйынса тарала. Франция, Ғосман империяһы, Бөйөк Британия, Япония, 1917 йылда АҠШ бер-бер артлы хәрби кампанияға ҡушыла. Шулай уҡ ошо илдәрҙең колониялары ла һуғыштан ситтә ҡала алмай. Шулай итеп, ҡыҫҡа ғына ваҡытта локаль конфликт донъя һуғышына килтерә.

Алдан күҙалланыуынса, һуғыш маневрлы башланып китә. Рәсәй ғәскәрҙәре Көнсығыш Пруссия менән Галицияны ала. Уңышлы башланып киткән походтың аҙағы генерал Самсонов армияһының фажиғәһе менән тамамлана. Генерал һалдаттары менән ҡамауға эләгә һәм күп кешеһен юғалта. Ләкин был яу Германияның Парижға барған ғәскәрҙәрен туҡтата һәм немецтарҙы Франция баш ҡалаһын баҫып алыу мөмкинлегенән мәхрүм итә. Германия хәрби көстәрен күберәк Рәсәйгә йүнәлтергә мәжбүр була. Ошо ваҡытта Галицияла Рәсәй армияһы австро-венгрҙарҙы тар-мар итә.

Бер аҙҙан һуғыш тиҙлеген юғалта. 1915 йылда Германия ике яҡлы һуғыш алып барыуы ҡыйын буласағын аңлап, тәүҙә Рәсәйҙе еңергә, һуңынан Антантаның башҡа илдәре менән һуғышырға ҡарар итә. 1915 йылдың яҙында немец армияһы Рәсәйҙең оборона фронтын йырып үтә һәм алға ынтыла. Был дәүер Рәсәй хәрби тарихында "Бөйөк сигенеү ваҡыты" исеме аҫтында билдәле. 1915 йылда Рәсәй Польшаны, Галицияны, Белоруссияның бер өлөшөн ҡалдырып китергә мәжбүр була.

1915 йылға регуляр ғәскәрҙәр күп өлөшөн юғалта, илдә запас бөтә, тыл бушай. Сигенеү көҙгә тиклем дауам итә. Һуңынан фронт бер аҙ тотороҡлана, Кавказда Ғосман империяһына ҡаршы уңышлы һуғыштар була. 1916 йылда Брусилов йырып сығыуы башлана. Ләкин уңышлы ғына башланып киткән был һөжүмде немец ғәскәрҙәре туҡтата ала. Тағы ла күпмелер ваҡытҡа әүҙем хәрби бәрелештәр тымып ҡала. Был ваҡытты дәүләттәр үҙҙәренең хәрби көстәрен нығытыу өсөн файҙалана. Рәсәй империяһы армияһын яҡшы итеп тулыландырыуға, туйындырыуға өлгәшә. Илдә булған бөтә ресурстар ҡулланыла, ғәскәрҙәр яңы кешеләр, техника, аэропландар, ҡорал, снарядтар, азыҡ-түлек ала. 1917 йылда һуғышты еңеү менән тамамлау өсөн бар мөмкинлектәр асыла.

Ләкин һәр кем әлеге армияны тәьмин иткән запастарҙан тыш, башҡа запастар ҡалмағанын, ниндәйҙер уңышһыҙлыҡ була ҡалһа, быныҡ ҙур еңелеүгә килтерәсәген аңлай. Антанта буйынса союздаштар ҙа быны күрә. Улар 1917 йылда Рәсәйгә фронтты тоторға, ләкин һөжүм итмәҫкә тәҡдим итә. Ә союздаштар американдар менән бергә көнбайыштан һөжүм башлай. Рәсәй өсөн был уңайлы була. Әммә артабанғы ваҡиғалар бөтөнләйгә хәлде үҙгәртә.

1917 йылдағы ваҡиғалар

1917 йылдың февралендә Рәсәйҙә революция була. Батша тәхеттән төшөрөлә, власть Ваҡытлы Хөкүмәт ҡулына күсә. Фронт революцияны ғәжәпләнеп ҡаршы ала, армияла һалдаттар рәтен тарҡатырға тырышҡан кешеләр барлыҡҡа килә. Ләкин хәрби етәкселек улар менән яҡшы көрәшә, йәйелеп эшләп китергә ирек бирмәй.

Әммә бында "бишенсе колонна" барлыҡҡа килә. Революция менән сәйәси аренаға сыҡҡан бөтә фирҡәләр ҙә һуғыштың еңеүгә тиклем дауам итеүен теләй. "Күп ҡорбандар бирелде, күп кеше үлде, һуғыш еңеүгә тиклем булырға тейеш", тип иҫәпләй улар. Бары большевиктар ғына һуғышты империалистик тип иғлан итә һәм ошо пропаганданы әүҙем рәүештә тарата. Улар штыктарҙы помещиктарға йүнәлтергә саҡыра. Улар элекке командирҙарҙы ғәскәрҙәр менән идара итеүҙән ситләштереүгә өлгәшә. Немецтар өсөн был ҡулай була. Улар рус ғәскәрҙәренә тәмәке, спирт тәҡдим итә, "ниңә һуғышырға, дуҫ булайыҡ", тип юхаланыуҙар башлана. Өс ай эсендә йәйгә Берлинды алыр ҡеүәте булған армия бөтөнләй һуғыша алмаҫ хәлгә төшә. Германия ла Рәсәйгә һөжүм итмәй.

Ошо ваҡытта уҡ Ваҡытлы Хөкүмәт тарафынан планлаштырылған ғәскәрҙәрҙе "милләтләштереү" башлана. Ҡайһы бер милләт, дин вәкилдәре махсус подразделениелар төҙөй. Бигерәк тә "украинлаштырыу" Рәсәй армияһы өсөн ауыр эҙемтәләргә килтерә. Улар, беҙ Рәсәй өсөн түгел, ә Украина өсөн һуғышабыҙ, тип дөйөм ғәскәрҙәрҙән айырымлана башлай. "Мосолманлаштырыу", киреһенсә, яҡшы яҡҡа була. Башҡорттарҙан, татарҙарҙан, Кавказ халыҡтарынан торған мосолман частәре, элек беҙ батша өсөн һуғыша инек, хәҙер ул юҡ, ләкин Рәсәй бар, унда беҙҙең хоҡуҡтар иҫәпкә алына, беҙ Рәсәй өсөн, тип иғлан итәләр.

Азамат ӘБҮТАЛИПОВ яҙып алды. (Дауамы бар).

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

Сергей РУДЕНКО

БАШҠОРТТАР

Ғаилә көнкүреше һәм халыҡ байрамдары

Ырыу ҡоролошоноң һәм уның үҙ ағзаһының берәйһе никахлашҡандағы йоғонтоһо эҙемтәһе булып башҡорттарҙа тол ҡалған ҡатындың мәрхүм иренең кесе туғанына йәки уның ағаһының улына кейәүгә сығырға тейеш булған йола һаҡлана. Был патриархаль ғаилә шарттарында бик йыш иҡтисади күҙлектән сығып та шулай эшләнә. Бер ырыу икенсе ырыуға ҡалым түләп үҙ мөхитенә эшсе ҡул ала. Ә инде тол ҡатынды үҙ иркенә ебәрһә, ул икеләтә сығым кисерә: беренсенән, эшсе ҡулын, икенсенән, милкенең бер өлөшөн юғалта. Сөнки тол ҡатын үҙенең бирнәһен үҙе менән алып китә. Ире үлгән осраҡта уның яҡын туғанына кейәүгә сығыу элек мотлаҡ булһа, XX быуат башында ул Урал аръяғы башҡорттарында, никахҡа инеүсе ике яҡ та риза булған осраҡта ғына, күҙәтелгән.

Д. К. Зеленин һүҙҙәренсә, Урал аръяғы ҡатайҙарында тол ҡатын мәрхүм иренең туғанына тормошҡа сығыуҙан баш тарта алған, әммә ирҙең туғаны, еңгәһе икенсе кешегә кейәүгә сыҡҡан осраҡта, уның туғандарынан тулыһынса ҡалым түләтеү хоҡуғына эйә. Тол ҡатынға өйләнеүгә беренсе дәғүәсе булып мәрхүм ирҙең бер туған ҡустыһы тора, икенсе булып - ағаһының улы. Был ике кандидат араһында бәхәс тыуғанда, мәсьәләне тол ҡатын үҙе хәл итә. Өсөнсө дәғүәсе булып ике туған йәки алыҫ туған тора.

Туплаған мәғлүмәттәрем буйынса, Урал аръяғында мәрхүмдең ҡустыһы менән тол ҡатын араһында никахтар күп теркәлһә лә, бында һәр саҡ хәл иткес һүҙҙе тол ҡатын әйткән. Ул, теләге булһа, ул шул уҡ ғаиләлә ҡалған, балаларын тәрбиәләп үҫтергән, әммә кейәүгә сыҡмаған. Хатта мәрхүм ирҙең туғаны еңгәһенә өйләнгән саҡта, уға тулыһынса булмаһа ла ҡалым түләгән осраҡтар ҙа бар. Ҡалымдың күләменән ире үлеп киткәндә уның ҡатынына өлкән һәм кесе ҡустыларының ни кимәлдә хоҡуғы булыуы ла асыҡ сағыла. Әгәр уларҙың икеһе лә еңгәһенә өйләнергә теләк белдерһә, өҫтөнлөк кем өлкән, шуға түгел, ә тол ҡатын үҙе кемде һайлай, шуға бирелгән. Әммә был осраҡта атай кеше өҫтәмә ҡалым талап иткән. Әгәр ҡатын вафат булһа, тол ир уның һеңлеһенә өйләнә. Ҡалым түләп алынған киленде ире вафат булған осраҡта уға ғаилә йәки ырыу төркөмө хоҡуҡлы булһа, ҡатын үлгән осраҡта хоҡуҡ уның яҡын ҡәрҙәшенә ята һәм был ғаиләнең йәки ырыу төркөмөнөң эшсе ҡулы алыуға киткән сығымдар менән баһалана. Туғанлыҡ мөнәсәбәттәренән сығып ҡарағанда башҡорттарҙа ир-аттың үҙенең бер туған ағаһының ҡыҙына өйләнеүе ҡәтғи тыйыла.

Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ғаиләләге хәле нисек була? Ҡайһы бер тикшеренеүселәр уйлауынса, уға аҡсаға һатып алынған ҡолға ҡарағанкеүек мөнәсәбәттә булғандармы, әллә башҡалар уйлауынса, уның яҙмышы ла рус ҡатындарыныҡы кеүек түҙерлек булғанмы?

Шуны иҫтән сығарырға ярамай, ҡатын хужалыҡҡа ниндәйҙер милек килтереп, уның хужаһы булып ҡала. Төрлө кейем-налым һәм биҙәүестәрҙән тыш, иренең ғаиләһенә алып килгән мал-тыуар ҙа уның милке һанала. Уларҙан килгән килем уның файҙаһына китеү генә түгел, ире ҡатынының ризалығынан башҡа уға тәғәйен малды һата ла, һуя ла алмай. Ир ҡул күтәргән йәки насар мөғәмәләлә булып, айырылған осраҡта, ҡатыны был ғаиләнән үҙенең милке менән айырылып китеүе уны бер ни тиклем бойондороҡһоҙ иткән, ә оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар, ғөмүмән, башҡорт ғаиләләрендә ҙур йоғонтоло булған.

✓ Кешегә тыуғанда ук ниндәйҙер абсолют критерийҙарҙы үҙ эсенә алған көйләнеш һалынған. Башҡорттарҙа ғәҙеллеккә, ирек һөйөүсәнлеккә, дөрөҫлөккә көйләнеш һалынғандыр, күрәһең.

БАШҠОРТЛОҠ –

Бөгөн нимә генә эшләргә булһаҡ та, нимәгә генә тотонһаҡ та, хатта ҡоролған ғаилә уңышһыҙлыҡҡа тарыһа ла менталитетҡа, темпераментҡа, характерға япһарырға тырышабыҙ. Ғөмүмән, нимә ул характер һәм башҡорт характеры ниндәй? Ул башҡаларҙан нимәһе менән айырыла? Ошо һәм әңгәмә барышында тыуған башҡа һорауҙарға педагогика фәндәре кандидаты Вәкил ХАЖИН һәм БДУ-ның Учалы филиалы деканы, философия фәндәре кандидаты Зилә РӘХМӘТУЛЛИНА менән бергәләп яуап эҙләйбеҙ.

Башҡорттоң тағы бер метафизик сифаты бар - ул тормошто ярата. Бәлки, шуның өсөн дә беҙ һаҡланып ҡалғанбыҙҙыр. Хатта халҡыбыҙҙың трагик йырҙарында ла, һин ҡойолоп төшөргә тейеш түгелһең, тигән кинәйә бар. Көрсөк хәл-торошонан барыһы ла сыға алмай, әммә башҡорттар үҙенең сабырлығы, түҙемлеге менән теләһә ниндәй ауырлыҡты күтәрә белә. Башҡорттоң аҡрын ҡуҙғалыуы, күп ваҡытта өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күреүе сәс йолҡорлоҡ ауыр мәлдәрҙе үткәреп ебәрергә ярҙам итә лә инде. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ирҙәре ил һаҡларға, әрме хеҙмәтенә киткәс, донъя йөгөн үҙ иңенә алып, сабыр ғына донъя көткән. Шундай ҡатындарҙан нисек батыр тыумаһын!

Вәкил Хажин: Характер - ул бик ҡатмарлы нәмә. Уға тәбиғәттән бирелгән темперамент та, тәрбиә лә, нәҫелдән килгән ҡан да, төрлө саралар ҙа, төрлө ваҡиғалар ҙа йоғонто яһай. Айырмаға килгәндә инде, әгәр ҙә ауыл башҡорттарын һәм ҡаланыҡыларҙы, бер район менән икенсеһенекен сағыштырып ҡараһаң - улар араһында күҙгә күренмәҫ ниндәйҙер айырма бар барыбер. Мәсетле һәм Хәйбулла райондарынан килгән башҡорт менән беренсе тапҡыр күрешеп, аралашырға тура килә икән, һөйләшә-һөйләшә уларҙың береһенең - көньяҡтан, икенсеһенең төньяҡ-көнсығыштан икәнлеген самаларға була. Самаларға ғына, ләкин асыҡтан-асыҡ күренеп торған һыҙаттар күрмәйәсәкбеҙ. Бөтөн төбәктәрҙә лә тиерлек булғаным бар, күп йыллыҡ тәжрибәмдән сығып әйткәндә, башҡорт менән башҡорт араһында әллә ни айырма юҡ, тиергә мөмкин.

Әгәр башҡортто башҡа милләт кешеләре менән сағыштырһаҡ, айырма, әлбиттә, бар. Тау халыҡтары, мәҫәлән, ҡыҙыу ҡанлы, ҡыйыуҙар, үткерҙәр, телдәре-телгә йоҡмай, ә башҡорттар - баҫалҡы, тыйнағыраҡ, үҙен билдәле бер сиктәр эсендә тоторға тырыша. Рус кешеһе, мәҫәлән, ҡайҙа барһа ла үҙен иркен тота, сөнки Рәсәй уның дәүләте икәнен яҡшы белә. Ә башҡорт бары тик тыуған ауылында ғына үҙен иркен хис итә. Ситкә сыҡһа, үҙен тыуған мөхитенән айырылғандай тоя. Йәғни беҙҙең милли характер ҡәбилә, ырыу булып, ауылда йомолоп йәшәгән ваҡытта асыҡ һыҙатланған, хәҙер юйыла төшкән.

Икенсенән, беҙҙең милли һыҙатҡа тарих та йоғонто яһай бит. XVIII быуатты ғына алып ҡарағыҙ - бер туҡтауһыҙ күтәрелгән ихтилалдарҙа башҡорт бер туҡтауһыҙ ҡырыла. XIX быуат тынысыраҡ үтә, әммә XX быуаттың 1918-1921 йылдар шауҡымы милләткә зәһәр ҡағыла. Ике-өс йыл дауамында, Башҡортостан территорияһында барған Граждандар һуғышы осоронда ағы ла, ҡыҙыл ла халыҡты талай, йәғни Башҡортостан ул ваҡытта ҙур тетрәнеүҙәр кисерә. Унан һуң - 1937 йылғы репрессиялар. Шул ваҡытта халыҡ күңеленә инеп оялаған ҡурҡыу артабанғы быуындарға ла бер ни тиклем тапшырыла бит. Ауыл ерендә йәшәүсе башҡорттарға шикләнеү, тыйылыу, һаҡланып һөйләү кеүек сифаттар шул осорҙа һеңеп ҡала. Бына шулай, кеше характерына йәшәгән мөхит, тәбиғәт, икенсе милләттәр йоғонто яһай һәм ул әкренләп үҙгәрә лә.

Зилә Рәхмәтуллина: Милләтебеҙҙең менталитетын өс өлөшкә бүлеп ҡарайым. Уның метафизик өлөшө - бер ҡасан да үҙгәрмәй торған асылы. Шулай уҡ социаль, психологик йоғонтоға бирелеп, үҙгәргән өлөшө лә бар. Социаль шарттар үҙгәргән һайын, кеше лә үҙгәрә бара. Ә бына, мәҫәлән, метафизик нигеҙҙе тәшкил иткән иректе, азатлыҡты яратыу хисен бер яҡтан баҫтырһаң, ул сәнғәт, йыр, бейеү, ижад һ.б. аша икенсе яҡтан килеп сыға. Һәр башҡортта бындай сифаттар "йоҡлай", шул һәләттәр уның күңелендә ята. Әммә ваҡыт үтә килә был метафизик сифаттарға яңылары өҫтәлеүе мөмкин. Улар, башҡа һыҙаттар менән ҡушылып, тап башҡортҡа ғына хас булған үҙенсәлекле колорит килеп сыға ла инде.

Шундай бер тарих һөйләгәйнеләр: Салауат Юлаев һәйкәлен Салауат районынан ситкә сыҡмай йәшәгән, үҙ ғүмерендә беренсе тапҡыр Өфөгә килгән бер вариҫына күрһәтәләр. Ул һәйкәлде ҡарай ҙа: "Һәйбәт эшләнгән, Салауат атта дөрөҫ ултыра", - тип, үҙенең баһаһын белдерә. Уның өсөн атта дөрөҫ ултырыу мөһимерәк, сөнки һыбай ултырыуҙың да ни бары ике манераһы бар һәм, ысынлап та, күптәр ат өҫтөндә дөрөҫ ултыра белмәй. Ә башҡорт икәнһең - һин атта дөрөҫ ултырырға тейешһең!

Шулай уҡ ым-ишаралап һөйләйһеңме, кешене ҡолас йәйеп ҡаршылайһыңмы - шунда ла башҡорттоң характеры сағыла. Кешенең күңелендә ятҡан холоҡ тәрбиә, хатта пластика аша бирелә. "Ете ҡыҙ" бейеүен "Березка" ансамбле бейеүселәре бейей икән, унан башҡорт бейеүенә пародия килеп сыға. Беҙҙең башҡорт ҡыҙҙарынан башҡа халыҡ бейеүҙәрен бейетеү ҙә шуның кеүек. Сөнки беҙҙекеләр башҡалар кеүек аяғын күтәреп бейей алмай, ә сит милләттәр беҙҙең ҡыҙҙар кеүек ойотоп бейей белмәй. Студенттар араһында ла бындай айырмалыҡтарҙы күрергә мөмкин: башҡорт ниндәйҙер һорауға яуап бирер алдынан, яйлап ҡына тороп, башын яңяҡҡа бороп, алан-йолан ҡараңғансы, башҡалар күптән яуап биреп тә ҡуя.

Башҡорттоң тағы бер метафизик сифаты бар - ул тормошто ярата. Бәлки, шуның өсөн дә беҙ һаҡланып ҡалғанбыҙҙыр. Хатта халҡыбыҙҙың трагик йырҙарында ла, һин ҡойолоп төшөргә тейеш түгелһең, тигән кинәйә бар. Көрсөк хәл-торошонан барыһы ла сыға алмай, әммә башҡорттар үҙенең сабырлығы, түҙемлеге менән теләһә ниндәй ауырлыҡты күтәрә белә. Башҡорттоң аҡрын ҡуҙғалыуы, күп ваҡытта өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күреүе сәс йолҡорлоҡ ауыр мәлдәрҙе үткәреп ебәрергә ярҙам итә лә инде. Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары ирҙәре ил һаҡларға, әрме хеҙмәтенә киткәс, донъя йөгөн үҙ иңенә алып, сабыр ғына донъя көткән. Шундай ҡатындарҙан нисек батыр тыумаһын! Үҙемдең ғилми эшемде яҙғанда ла мин был юлдарҙы бер маңҡорт уҡыһын да, башҡорттоң идеаль образы менән һоҡланһын, тигән изге хыял менән йөрөнөм. Сөнки кешенең үҙаңы үҫһен өсөн уға даими рәүештә тылҡып торорға кәрәк.

▸ Характерҙы образлы рәүештә кешенең умыртҡа һөйәге менән сағыштыралар. Медицина күҙлегенән ҡарағанда, умыртҡа баҫаналһында саҡ ҡына тайпылыш булғанда ла кеше тулы ҡанлы тормош менән йәшәй алмай. Ә тормошта, кешелә, милләттә ошо умыртҡа баҫаналһы булған характерҙан тайпылыу була икән, ул үҙенең ысынбарлығын, үҙенең булмышын юғалтмаймы?

Вәкил Хажин: Минеңсә, был үҙәк беҙҙең халыҡта әле лә бар. Мин бында кешеләр алдында үҙеңде тотоуҙы ла күҙаллайым. Ул бит тәрбиәнән дә килә. Тәрбиә булмаһа, кеше хайуан сүрәтен ала, тап социумда ғына ул кешегә әйләнә. Арыҫлан балаһын өйҙә тотһаң да, зоопаркта тотһаң да, яңғыҙ урманда үҫһә лә, ул барыбер арыҫлан балаһы булып ҡала. Ә кеше балаһы фәҡәт ғаиләһендә генә кешегә әүерелә. Шуның кеүек, милләтебеҙ башҡорт араһында ғына башҡортлоғон һаҡлай ала. Башҡорт араһынан киткәһе, башҡортлоҡто һаҡлау бик ауыр. Мәҫәлән, бик әҙҙәр генә үҙҙәренең туған теленә тоғро ҡала.

Ни өсөн беҙ үҙгәргәнбеҙ һуң? Ихтилалдарҙа иң уҫалдар, иң үткерҙәр, иң көслөләр ҡырылған. 1918-1921 йылдарҙа Башҡорт ғәскәре сафтарында көрәшкән һәм һәләк булған ирҙәр шулай уҡ көслө, милләте өсөн янып торған кешеләр булған. 1937 йылда милләттең саҡ ҡына күтәрелеп килгән өҫкө ҡатламы юҡ ителгән. Ҡасандыр бөтөн донъяны дер һелкеткән Монголия бөтә һаҡлау бик ауыр. Мәҫәлән, бик әҙҙәр генә үҙҙәренең туған теленә тоғро ҡала.

Ни өсөн беҙ үҙгәргәнбеҙ һуң? Ихтилалдарҙа иң уҫалдар, иң үткерҙәр, иң көслөләр ҡырылған. 1918-1921 йылдарҙа Башҡорт ғәскәре сафтарында көрәшкән һәм һәләк булған ирҙәр шулай уҡ көслө, милләте өсөн янып торған кешеләр булған. 1937 йылда милләттең саҡ ҡына күтәрелеп килгән өҫкө ҡатламы юҡ ителгән. Ҡасандыр бөтөн донъяны дер һелкеткән Монголия бөгөн ни өсөн шундай хәлдә? Ни өсөн бөгөн үҙҙәрен күрһәтә, күтәрә алмайҙар? Сөнки иң көслө ирҙәрҙе Сыңғыҙхан үҙе менән алып киткән, илдә бала-саға ла, ҡарт-ҡоро тороп ҡалған. Уларҙан, әлбиттә, милләтте артабан үҫтерерлек кешеләр сыҡмаған. Шуның кеүек, беҙҙең башҡортта ла шул тенденция күҙәтелә - гел иң өҫтә торғандарҙы ҡырып, сабып торғас, ул тора-тора ваҡлана. Бөгөн, мәҫәлән, халҡыбыҙҙы Салауат Юлаевтың замандаштары менән бик үк сағыштырып булмай. Беҙ ул осорҙағы ир-егеттәребеҙҙең нисек һуғышыуын тарихи документтар аша ғына күҙаллайбыҙ. Әммә Бөйөк Ватан һуғышында башҡорт атлыларының шундай уҡ ғәйәрлек менән ут эсенә инеүе тураһында ла беләбеҙ. Йәғни, халыҡтың булмышында уның асылы һаҡлана һәм ул кәрәк ваҡытта "уяна".

▸ Атта һыбай йөрөүҙең дә үҙ манераһы бар, тигәндән, үҙенән-үҙе һорау тыуа: һәр төрки халҡының үҙ көрәше бар, әммә улар ҡағиҙәләр буйынса айырыла. Ә бына башҡорт көрәшендә башҡа көрәштәрҙә күҙәтелгән аяҡ салыу, хәрәмләшеү кеүек күренештәр юҡ, бары тик дәғүәсеңде ерҙән айырып, күкрәк аша алып ташларға тейешһең, йәғни башҡорттар һәлмәк һәм ғәҙел көрәшә. Быны ла милләттең характерына бәйләп буламы?

Зилә Рәхмәтуллина: Көрәш тураһында әйткәндә, тағы ла метафизик бер критерийҙы - ғәҙеллеккә ынтылышты ла әйтмәй булмай. Башҡорттоң характерындағы ғәҙеллек, намыҫлылыҡ тигән төшөнсә лә боронан килә.

"Урал батыр" эпосындағы Урал батыр ҙа, әкиәттәребеҙҙәге башҡа батырҙар тик ғәҙел еңеү яулай. Ә бит башҡа халыҡтарҙың әкиәттәрен алып ҡараһаң, батырҙар уларҙа йә хәйлә, йә башҡа этлек аша үҙ маҡсаттарына өлгәшә. Көрәшкә килгәндә лә, уның Башҡортостанда таралған төрөндә башҡорт характеры сағылыш табалыр, тип уйлайым.

Ни өсөн башҡорттар араһында эшҡыуарҙар бармаҡ менән һанарлыҡ, тигән һорауға яуап биргәндә лә тап шул ғәҙеллек, дөрөҫлөк принцибынан сығып фекер йөрөтөргә кәрәктер. Эшҡыуарлыҡ башҡортҡа килешеп етмәй, сөнки бөгөн эшҡыуарлыҡ, бизнес тигән термин артына йәшеренгән алыпһатарлыҡ кеше алдауға ҡоролған. Алыпһатарҙар үҙҙәре бер нәмә лә етештермәй, улар әйберҙе бер урындан оҫоҙға алып, икенсе урында ҡиммәткә һатыу менән генә шөғөлләнә.

Кешегә тыуғанда ук ниндәйҙер абсолют критерийҙарҙы үҙ эсенә алған көйләнеш һалынған. Башҡорттарҙа ғәҙеллеккә, ирек һөйөүсәнлеккә, дөрөҫлөккә көйләнеш һалынғандыр, күрәһең. Хатта башҡорт кешеһе ниндәйҙер мәсьәлә буйынса етәкселәнә бер тапҡыр барып, проблемаһын хәл итә алмай икән, ул икенсе тапҡыр үҙен көсләп алып барасаҡ, өсөнсө тапҡыр барып та тормаясаҡ. Сөнки үҙе ғәҙел булғас, башҡаларҙы ла үҙе кеүек тип уйлай. Ә бит башҡа милләттәр ундай түгел, ишектән ҡыуалар икән, тәҙрәнән килеп инәләр.

▸ Ирек һөйөү, азатлыҡҡа ынтылыш бар халыҡтарҙа,

шул уҡ Кавказ халыҡтарында ла, шул уҡ рустарҙа ла бар. Шул күҙлектән сығып, бар халыҡты ирек һөйөү, азатлыҡ идеяһы берләштерә тип әйтергә буламы?

Вәкил Хажин: Ҡолдарҙа ундай идея юҡ. Спартак заманында булған ул ҡолдар ихтилалы, ләкин улар төньяҡтан килгән халыҡтар булған. Ә Европаның төньяғындағы халыҡтар ҡыҙыуҙар, һуғышсандар. Крепостной крәҫтиәндәр бит ихтилалға күтәрелмәгән. Разин, Пугачев ихтилалдары, тибеҙ, әммә унда бит крепостной крәҫтиәндәр түгел, казактар һуғышҡан. Әле бөгөнгө Донбасс, Луганскиҙа сыуалыштар бара икән - унда бит элекке казактарҙың тоҡомдары йәшәй. Урал, Яйыҡ буйында ла казактар төйәкләнгән. Ә казак - рустың ирек һөйөүсе өлөшө.

Башҡорттарҙың гел элитаһы ҡырылып торған, тип әйтеп үттек. Ә бына, ҡар баҫҡан тайпылһаҡ йәки баш тартһаҡ, уның беҙгә насарлыҡ булып әйләнеп ҡайтыуы ихтимал. Ергә килгән һәр милләттең үҙенең ниндәйҙер миссияһы бар. Уны тормошҡа ашырһаң, ул бумеранг кеүек яҡшылыҡ булып әйләнеп ҡайта. Шуның өсөн генә булһа ла ошо метафизик базаға һалынған абсолют критерийҙарҙан китергә, ситләшергә ярамай.

Ниндәйҙер ваҡиғаны ошо ваҡыт күҙлегенән генә ҡарайһаң, бәлки, ул бигүк яҡшы ла, уңайлы ла түгелдер. Мәҫәлән, шул уҡ ихтилалдарҙа ниңә күпләп ҡатнашып, халҡыбыҙҙы ҡырҙырырға кәрәк булған икән, тип уйлайбыҙ йыш ҡына. Әммә ошо ваҡиғаларға Йыһан, бөтөн Ер шары кимәленән ҡарайһаң, был үҙен аҡлай. Шуға ла, ниңә шулай иткәнбеҙ, ниңә былай иткәнбеҙ, тигән үкенеү булырға тейеш түгел.

Вәкил Хажин: Тулыһынса килешәм: беҙҙең үҙебеҙҙең миссиябыҙ бар, шуға ла беҙ үҙебеҙҙе һаҡлай алғанбыҙ. Милләтебеҙҙең тарихҡа билдәле булған, уның ҡағыҙға төшөрөлгән мәленә генә лә - 2500 йыл. Сөнки беҙҙең турала бынан 2500 йыл элек йәшәгән Геродот яҙып ҡалдырған. Шул ваҡытта ла ошо уҡ ерҙә, ошо уҡ атамала, ошондай уҡ халыҡ булып йәшәгәнбеҙ. Ибн Фазландың, башҡаларҙың башҡорттар хаҡында яҙған ҡыҫҡа ғына ҡылыҡһырламалары бөгөнгө башҡорттарҙың характерында ла сағылыш таба икәнлеген күрәбеҙ. Әммә бөгөнгө башҡортлоҡ менән шул быуаттар дауамында килгән башҡортлоҡтоң араһында айырма бар. XX быуатта элита ҡырылған, тип һөйләйбеҙ, әммә эскелекте бөтөнләй күҙҙән ысҡындырабыҙ. Ә бит был алама ҡылыҡ кешене генә түгел, тотош милләтте юҡҡа сығара яҙҙы. Әгәр ҙә бөгөн Башҡортостанда башланған "Айыҡ ауыл" шауҡымы бөтөн республикаға таралып, араҡы ҡоллоғонан ҡотолһаҡ, асылыбыҙға кире ҡайтасаҡбыҙ. Беҙҙең өсөн кемдең Президент булыуы ла мөһим түгел, сөнки батша ҡулы аҫтында ла, Сыңғыҙхан идара иткәндә лә йәшәгәнбеҙ, әммә үҙебеҙҙең йырҙарыбыҙҙы һаҡлағанбыҙ, эпостарыбыҙҙы тыуҙырғанбыҙ, ҡурайыбыҙҙа уйнаған-быҙ, шул Уралда йәшәгәнбеҙ, шул көйөнсә үҙебеҙҙең телебеҙҙе, мәҙәниәтебеҙҙе бөгөнгәсә килтереп еткергәнбеҙ.

Милләт өсөн иң зыянлы, яуыз нәмә - ул ихтилалдар ҙа, репрессиялар ҙа түгел, ә эскелек. Ул характерыңды ла юҡҡа сығара, һине көнсөллөккә, урлашыуға, алдашыуға, деградацияға ла килтерә. Әгәр үҙебеҙҙе һаҡлайбыҙ тиһәк, эскелектән ҡотолорға, мәҙәниәтебеҙҙе күтәрергә кәрәк. Мәҙәниәтебеҙ - ул беҙҙең телебеҙ, ул - беҙҙең йырҙарыбыҙ, ул - беҙҙең бейеүҙәребеҙ, ул - беҙҙең боронборондан килгән ғөрөф-ғәҙәттәребеҙ.

Рекламалағы кеүек, нисек кенә борғолаһаң да, барыбер һүҙ мәҙәниәткә, телгә барып тоташа...

Вәкил Хажин: Ниндәй генә һөйләшеү алып бармайыҡ, ниндәй генә эштәр эшләмәйек, улар барыһы ла халҡыбыҙҙың артабан да йәшәүен, мәҙәниәтебеҙҙең, телебеҙҙең һаҡланыуын тәьмин итергә тырышыуға ҡайтып ҡала. Ни өсөн мәҙәниәт менән телде һаҡларға кәрәк? Сөнки мәҙәниәт менән тел үҙҙәре үк халыҡты һаҡлай. Бына шуларҙы йәштән үк балаларға бирә, һеңдерә алһаҡ, ул милләтте һаҡлауға алып киләсәк.

Ни өсөн беҙ үҙгәргәнбеҙ һуң? Ихтилалдарҙа иң уҫалдар, иң үткерҙәр, иң көслөләр ҡырылған. 1918-1921 йылдарҙа Башҡорт ғәскәре сафтарында көрәшкән һәм һәләк булған ирҙәр шулай уҡ көслө, милләте өсөн янып торған кешеләр булған. 1937 йылда милләттең саҡ ҡына күтәрелеп килгән өҫкө ҡатламы юҡ ителгән. Ҡасандыр бөтөн донъяны дер һелкеткән Монголия бөгөн ни өсөн шундай хәлдә? Ни өсөн бөгөн үҙҙәрен күрһәтә, күтәрә алмайҙар? Сөнки иң көслө ирҙәрҙе Сыңғыҙхан үҙе менән алып киткән, илдә бала-саға ла, ҡарт-ҡоро тороп ҡалған. Уларҙан, әлбиттә, милләтте артабан үҫтерерлек кешеләр сыҡмаған. Шуның кеүек, беҙҙең башҡортта ла шул тенденция күҙәтелә - гел иң өҫтә торғандарҙы ҡырып, сабып торғас, ул тора-тора ваҡлана.

Абсолют критерийҙарҙан ситләшмәҫкә кәрәк, тинегеҙ, быныҡ менән беҙ үҙебеҙҙе сикләмәйбеҙме икән?

Зилә Рәхмәтуллина: Әгәр беҙ, боронғо халыҡ, элек-электән Йыһан ритмдары менән йәшәгәнбеҙ икән, беҙ башҡаса була алмайбыҙ. Хатта донъя алдында, кешелек алдында башҡаларға ҡарағанда күберәк яуаплылыҡ тоябыҙ, тиер инем. Әгәр ошо юлыбыҙ Башҡорт үҙ тарихының беҙгә билдәле 2500 йыл арауығында нимәләр генә күрмәгән дә, ниндәй генә юлдар үтмәгән, нимәләр генә кисермәгән. Бәлки, байҙары ла, батшалары ла, ғәскәре лә, үҙенең дәүләте лә булғандыр, ләкин улары һаҡланмаған бит. Телебеҙ һаҡланып ҡалған. 40-ҡа яҡын төрки телдәре араһында бер беҙҙә генә *h, ç, ҙ* өнө бар. Был беҙҙең боронғолоҡто раҫлаусы уникаль күренеш. Йырҙарыбыҙҙы ҡарағыҙ. Шул тиклем моң уларҙа! Ул бөгөнгө барабан тауышы түгел. Барабан - ул ритм, ә беҙҙең көйҙәрҙә ритм юҡ, үлсәү ҙә юҡ. Күпме теләйһең, тыныҡ күпмегә етә - шунса һуҙаһың. Телебеҙ, көйәте-бабаларыбыҙ бәләкәйҙән үк балаларға йондоҙҙар тураһында мәғлүмәт өйрәтә башлаған. Ҡоролоҡ килерен дә алдан күҙаллап, әҙерләнеп торғандар. Башҡорттоң билдәле тарихында аслыҡ бер тапҡыр ғына - 1921 йылда, совет власы заманында ғына булған. Хатта 1941 йылғы һуғыш ваҡытында ла башҡорт ауылдарының күбеһе аҫҡа йонсомаған.

Зилә Рәхмәтуллина: Йондоҙҙарҙы белеү ҙә беҙҙең боронғолоғобоҙҙо иҫбатлай. "Урал батыр" эпосында ла бит йондоҙлоҡ, уның буйынса ерҙең хәрәкәте сағылдырыла.

Ә *h, ç, ҙ* өндәренә килгәндә, улар бит тәбиғәттә лә бар. Бал ҡорто "ҙҙҙ" тип беҙелдәп оса, йылан ыҪылдый, "һы" тип Ер тын ала. Хатта ошо өндәрҙе әйткәндән генә лә ниндәйҙер күтәренкелек барлыҡҡа килә. Уйлап ҡараһаң, бөтөн нәмә үҙебеҙҙән тора. Әйҙә, ошо ғәжәйеп өндәрҙе әйтеп, бөтөн ерҙә башҡортсалап һаулыҡ һорашайыҡ. Яйлап һан сифатҡа әйләнә башлай бит ул.

Башҡорттарҙың 40 проценты бөгөн ауылда йәшәй. Әйтеп үтеүебеҙсә, ауыл менән ҡала башҡорто араһында айырма бар һәм башҡорт үҙенең башҡортлоғон бары тик ауыл ерлегендә генә һаҡлай ала. Әммә бөгөн тотош илдә алып барылған сәйәсәт ауылдарҙы бөтөрөү йүнәлешенә юл алған кеүек тойола...

Вәкил Хажин: Ауылдарҙы бөтөрөп, башҡорттарҙың бөтөнөһөн дә ҡалаға күсерһәк, 20 йылдан башҡорт тигән милләт ҡалмаясаҡ. Башҡортто һаҡлау өсөн ауыл кәрәк. Ҡала ерендә 100 процент башҡорто ла башҡорт итеп тәрбиәләп булмай. Ҡаланың башҡорт мәктәптәрендә барлыҡ уҡыусылар ҙа рухлы булып тәрбиәләнә, тип раҫлай алмайым. Рухты ғаиләлә рухлы ата-әсәләр генә һала ала. Ә ауыл ерендә хатта иң насар уҡыған, иң йүнһеҙ күренгән бала ла үҙен башҡорт тип иҫәпләй. Гөмүмән, бәләкәй милләттәрҙең һаҡланыу юлы - ул ауыл ере һәм мәҙәниәт.

Зилә Рәхмәтуллина: Ауылда йәшәүселәрҙең юғары белемелә, эше лә юҡ, тормош кимәле лә түбән, тип уйлайбыҙ. Шул уҡ ваҡытта, ентекләп ҡараһаң, башҡорт халҡы һаҡланып ҡалһын өсөн ул ауылда йәшәргә тейеш. Абсолют критерийҙар күҙлегенән ҡарағанда, шунан да ҡулай юл юҡ. Эйе, ауыл балалары юғары белем алырға ҡалаларға килә, әммә миллионлы халҡы булған мегаполиста үҙҙәренең асылын юғалта. Улар менән яйлап милләт тә юҡҡа сыға.

Әгәр үҙгәртеү мөмкинлеге булмаған нәмәләр бар икән, улар өсөн әсенергә, артыҡ баш ватырға ярамай, минеңсә, уны тәбиғәт тарафынан шулай ҡушылған һәм был дөрөҫ тип ҡарарға кәрәктер. Генетика буйынса беҙ бит әле күп нәмәләрҙе белмәйбеҙ. Ҡасандыр башҡорт элитаһы ҡырылған икән, ул гендар бит барыбер кемдәрҙәлер дауам итә. Һәм ошо ген быуындан-быуынға килә-килә ҡасан да булһа ҡалҡып сығасаҡ. Заманында Салауат Юлаевтың, Зәки Вәлидиҙең исемдәрен телгә алырға ҡушылмаһа ла, йылдар үткәс, улар бит барыбер донъяуи масштабта үҙҙәрен белгертте.

(Дауамы 11-се биттә).

✓ Табипҡа сират көтөп ултырғанда ла иренең тәненең ҡалтырауын тоя. Бөтөп барғанда ризыҡ та тәмлерәк кеүек. Ғүмер аҙағында ғына йәшәүҙәренә йәм керҙе. Ғәҙәти тойолған һәр нәмәне әле мөғжизә итеп ҡабул итә Айзада.

"Кырҡты уҙған..." Айзада көҙгөнән үҙенең сал төшкән сикә сәстәрен, күҙ төбөнә ятҡан ваҡ һырҙарҙы, һалбыраңҡыраған эйәген күреп, моңһоу ғына әйтеп ҡуйҙы. Шулай итеп һиҙҙермәйенсә генә етә икән ул ҡартлыҡ. Донъя, мал, ир, бала, эш, тип йүгерәһең-йүгерәһең дә... Ниндәйҙер әйләнеп сығып булмаҫ ҡуласа. Өй һаланың, уныһының осо-ҡырыйы юҡ, өйөргә лә өйөргә... Бала таптым, тиһәң, уныһының үҫкәне һайын бәләһе ҙурая... Ир тигәне тағы, башҡа сир... Мөхәббәт тип, күҙең тоноп кейәүгә сығаһың да, бер көн ҡараһаң - яныңда ҡорһаҡлы, ялтас, йыйырсыҡ баҫҡан бер ят ҡарт тора...

Былтыр өлөсәй булғас та был тиклем күңел төшөнкөлөгөнә бирелмәгәйне әле. Ҡыҙының һаулығын ҡайғыртыу, бәпесте ҡаршылау-ҡарау мәшәҡәттәре менән уйланмаған. Ейәнсәренең тәмле еҫен ҡомһоҙланып еҫкәйеҫкәй яратып туя алмай бер булды. Үҙенең балаларының нисек үҫкәнен дә күрмәгән Тимерйәне лә, олатай булғас, үҙгәреп китте. "Ҡулым килешмәй" тип һылтаулап, үҙенекеләргә йоғоноп та ҡарамағанды, был бәпесте ҡулынан төшөрмәй тигәндәй йөрөттө. Ялҡырмы тиһәң, оҙағыраҡ илау тауышы сыҡмаһа, "бәпес ҡайҙа" тип бер була. Кейәү балаҡай ҙа баласыл ғына күренә. Кәрәк икән, аҫтын да алыштыра, йыуындырырға ла ҡурҡмай тотона. Шуны күреп аптырағайны Айзада. Яңы быуын атайҙар икенсе була микән әллә, тип аптырағайны. Ул белгән ғаиләләрҙең береһендә лә бала ҡарашҡан ирҙәр булманы. Айзаданыҡы, ярай инде, көнө-төнө эштә булды, ял көндәре ихатала ул-был итте.

Ана, Әсмә әхирәтенеке ни, көндәр буйы урамсылап йөрөр ине, кеше эшен бөтөрөп, төнгөлөккә "ләх" иҫереп ҡайтып килә, йә килтереп ташлайҙар. Тегеһе ни, бахыр, йәш бала менән йоҡо ла күрмәй, ни өйҙә эш тота алмай, иҫерек ирҙе һөйрәп керетеп ятҡыра, бысрағын йыуа. Бахмурҙан ауырый башлаһа, сабый бала ҡарауҙан былайыраҡ йонсоп, уны ҡарай. Шунда ла әле, йылы һүҙе юҡ ир тигәндәренең, әхирәтенән йөй табып, аҡырына-баҡырына, ҡул күтәреп маташа. Ә бисә кешегә ни, һаман шул донъя тип йәбешеп ятҡан була инде. Аранда малың торһон баҡырып - ашатырға-эсерергә, аҫтын ташларға кәрәк. Өйөндө йылытам тип, йәш утынды бысҡылдатып, төтөнөнә сәсәй-сәсәй мейесеңде яғырға кәрәк... Кереңдең таҙалығын, ашыңдың тоҙон тикшереп, зәһәрен сәсергә ажғырып торған ҡәйнәң бар... Шуға иртәрәк ҡартайғандыр инде Әсмә әхирәте. Төҫкә генә түгел, уның климакс тигән нәмәһе лә иртә башланды. "Абортҡа йөрөү мәшәҡәтенән ҡотолдом", тип һөйөндө генә үҙе.

Хәҙер бына Айзадаға ла сират етте әбей булырға, абау. "Ырыуҙан ҡалған" тигән һүҙе генә ни тора. Илағыһы килеп китте. Һуңғы осор шулай топтойоҡтан кәйефе ҡырылып, балауыҙ һығырға ғына тора. Юҡҡа-барға йәне көйөп, ене ҡуба башлай. Шулай ҙа әбейгә әйләнеү процесы сағыштырмаса еңел үтәсе. Башы әйләнеп, быуынһыҙланып, хәле бөтөп китә тоҡтомалдан, йә ҡапыл күңеле болғанып, уҡшытып ебәрә. Түҙһең инде, тәбиғәт ҡушҡас. Был донъялағы һәр йәнэйәһенең яралыу, үҫеү, сәскә атыу ваҡыты булған кеүек, ҡыуарыу, ҡартайыу мәле лә бар бит. Тыумаҡтан ҡалмағас... Тәүбә, әле генә гүргә керергә булмаһын инде ул! Малайҙы өйләндерәһе бар, башҡа сығараһы. Ҡыҙҙы ла, кейәүгә бирҙең дә - ҡотолдоң түгел, һүҙ ярҙамы ла, мал ярҙамы ла байтаҡ ваҡыт кәрәк буласаҡ үҙҙәренә. Уйлай китһәң, Тимерйәне менән дә йәшәп кенә лә ҡарамағандар әле! Донъя малы артынан ҡыуыуҙан бушап, бер-береһе менән серләшеп ултырырға ла форсат тапмайҙар. Ҡайҙа ти ул, ҡайһы берәүҙәр һымаҡ етәкләшеп кенә диңгеҙ буйҙарын ҡыҙырыу, ҡосаҡлашып талғын көйгә бейеүҙәр, хистәр тулҡынында онотолоп бәүелеүҙәрҙәр... Шулай уҡ ашмаҫ хыял ғына булып ҡалыр микән ни быларҙың барыһы ла? Әстәғәфирулла, ун йылдан һуң пенсия аҡсаһы һанап, бер кешегә лә кәрәкмәйенсә, дүрт стенаңдың дүрт мөйөшөнә теклəп ултырырғамы ни? Кейәүгә сыҡҡанынан бирле 25 йыл үткәнде тоймағанды, ул ун йыл ни, керпек ҡаҡҡансы ла үтеп китә инде... Уф, йөрәккәйе... Ниндәй үкенестәр генә тулы донъя был?

- Әҙерәк диета тотоп алһаңсы, әсәй, бынау күлдәгең былтыр һәләк килешә ине үҙеңә, әле әллә ҡалай тора - билең бөткән...

- Ah-ah...Ҡәҙерлегә генә кейгән күлдәгемде... Әллә нимә лә ашап ултырмайым инде, ғүмер буйы ашаған ит тә бәрәңге...

- Үҫә торған йәш организм ғына бөтөн нимәне эшкәртә ул, ә һиңә хәҙер үҙеңде уйларға ваҡыт. Ауыр ризыҡ ашама, күберәк салат-малат ҡап, емеш-фәләңде...

Ҡыйын Айзадаға ошондай һүҙҙәрҙе тыңлауы. "Ҡарсыҡ", "әбей", "ҡортҡа" тип ҡолаҡ төбөндә тылҡып торалар һымаҡ. Шул тиклем күңеленә ауыр, әйтеп бөтөргөһөҙ. Йөрәге һыҙлауын баҫыр өсөн шулай килеп сығамы - берәй нәмә сәйнәгеһе, ҡапҡылағыһы ғына килеп тора шул, ҡарышҡан кеүек. Яңыраҡ телевизорҙан һөйләгәйнеләр "стресс" тип. Ашау менән баҫырып ҡуйыу зыянлы, тиҙәр. Һүҙен дә уйлап сығаралар. Донъяның фанилығын, бер ниҙе лә ҡайтарып булмауын, ғүмереңдең заяға уҙыуын йөрәгең менән аңлап, йәнеңде үкенес ҡорто кимереүен һыйҙырып буламы ни шул һүҙгә...

"Әллә нишләп эсем йышйыш ауыртып ала, ауыр, аҫҡа тарта", тип фельдшер ҡыҙға барырға мәжбүр булды бер көн. Түҙеп, үткәреп йөрөнө инде һыҙланыуҙарын. Унда ла бармаҫ ине, ҡатын-ҡыҙҙар онкологияһы тураһында тапшырыу тыңланы. Һуңғы йылдар бигерәк нык таралған икән был сир. Билдәләрен тыңлап ултырҙы ла, йөрөге жыу итеп ҡалды. Барсы, Айзадала ла барсы бындай билдәләр... Түштәре лә, төйөрмө ни, ҡатты лаһа...

Фельдшер ҙа йыуатырлыҡ һүҙ әйтә алманы:

- Төҫөгөҙ ҡасҡан шул, апай, районға барып күренегеҙ, - тип ҡушты.

Ундағы табип иһә Айзаданы әйләндереп-тулғандырып ҡарап, һораштырып ултырҙы ла, "Ошо хәлгә еткәнсе нимәләрен ҡарап йөрөй икән ошо ауыл бисәләре", тип әрләй-әрләй, башҡалаға йүнәлтмә яҙҙы.

- Матҡаңды таба алманым апай, һуңғы бала тапҡанығыҙҙа бер-бер хәл булғайнымы әллә?

- Белмәйемсе, әйтмәнеләр... Наркоз аҫтында инем бит, кесарево эшләнеләр..

- Ҡыҫҡаһы шул, апай, кисекмәҫтән Өфөгә, онкоцентрға барығыҙ. Опухоль ҙур, һуң булмаҫ борон, бәлки, операция менән ҡотолоп булырлыҡтыр...

Район үҙәгенән ҡайтҡансы буҫығып бөттө Айзада. Нимә ҡылырға, ҡайҙа барып бәрелергә белмәне. Эй -й-й, нимә тип кенә "донъя көтәм" тип йәбешеп ятҡан була икән кеше! Йыйған ниғмәттәренең ҡәҙерен белеп, тиңе менән сөкөрҙәшеп кенә йәшәй башлар саҡта, ошолай итеп, ҡараңғы гүрҙәргә кереп ятылыр микән ни? Балаларын ныҡлап аяҡҡа баҫтырманы, ейән-ейәнсәрҙәр бәпләп тә ултыра алманы. Тимерйәне кем ҡулына ҡалыр ҙа, бөртөкләп кенә йыйған донъяларын кем оятһыҙының аяғы тапар?.. Ошо ғүмер йәшәп, ниндәй рәхәт күрҙе әле Айзада? Бараһы ерҙәренә барманы, күрәһе ерҙәрен күрмәне... Асыу килтереп, телевизоры ла ымһындырып, әллә нимәләр күрһәтә лә тора. Ауыҙ һыуы ҡоротоп һөйләнеләр ҙә, хәҙер уның ҡолаҡ ишетмәгән, күҙ күрмәгән ризыҡ ашағыһы килеп китте. Бөткән баш - бөткән, күпме генә ғүмер ҡалғандыр, шул быҡтырылған авокадо менән тултырылған кальмар ашап ҡарарға ине. Исмаһам, бер үкенесе кәм булыр ине...

- Нимә мыш-мыш танау тартаһың баянан бирле, йоҡо маҙаһы бирмәй, - Тимерйән йоҡо аралаш мыжый-мыжый юрғанды үҙенәрәк тартты. - Шул тиклем ниндәй хәсрәтең барҙыр...

- Авокадо ашағым килә... һыңҡ...

- Нимә? Аҡылдан яҙа башланың мәллә? Тағы нимә етмәй?

- Тағы... тултырылған кальмар ашағым килә-ә-ә...

Ҡапыл йоҡоһо осҡан ир тороп уҡ ултырҙы:

- Һин нимә, ауырый башланың мәллә?..

Күңеле тулған ҡатындың һүҙ быуаһы йырылып китте, ҡасандан бирле һаҡлаған эс серен илай-илай иренә түкте лә ҡуйҙы.

- Мда-а-а...- Байтаҡ уйланып ятҡас ҡына һүҙ башланы Тимерйән. - Хәлдәр былай булғас, малдың байтағын тотоноргә булыр. Малайға туйға тигән аҡса ла байтаҡ йыйылғандыр әле.

- Ҡуй, йәшәйһе кешегә кәрәк булыр...

- Ниндәй кешегә? Нимә өсөн йыйған беҙ ул донъяны, кәрәк саҡта изгелеген күрмәгәс? Һин нимә, мине ташлап ҡасырға уйлап тораңмы? Ваҡытынан алда үҙеңә йыназа уҡып ултырма, йәнде көйҙөрөп! Хәҙер медицина көслө, әллә нимәнде лә дауалай. Иртәгә үк Өфөгә сығып китәбеҙ, Алла бирһә... Аҡса бик етмәҫтәй булһа, аҡсарлағымды ла "осororға" тура килер...

Иренең һуңғы һүҙҙәренән Айзаданың күңелендә аңлатып булмаҫлыҡ наҙ уянды. "Аҡсарлағым" тип машинаһын әйтә Тимерйәне, "өф" итеп кенә тотҡан тәтәйе. Шул хәтлем ҡәҙерләгән нәмәһен тотоноргә ла йәлләмәгәс, ярата булып сыға шатлыҡ, пальто-итек алһаң, лотореяға миллион отҡандан былай бәхет. Ҡайҙа ти ул памперсфәләп? Әле, ана, ейәнсәренең ниндәй генә кейем-тәтәйҙәре юҡ! Айзаданың йәш сағында булһамы ошо муллыҡ! Тимерйән кеүек аҫыл ирҙән табыр ине тағы берикене... Шау үкенес кенә был донъя, исмаһам, алда әҙерәк ғүмер булһасы...

- Нимә тағы балауыҙ һығаһың, һөйләштек бит инде, йырып сығырбыҙ бергә!

- Авокадо-о-о...

- Уф! Килоһы менән алып бирермен иртәгә, тым түлке!..

Тыштан үҙен ышаныслы, тыныс тотһа ла, ныҡ борсолғаны, уйланғаны тойола Тимерйәндең. Табипҡа сират еткәнен көтөп ултырғанда ла иренең тәненең еңелсә ҡалтырауын тоя. Бөтөп барғанда ризыҡ та тәмлерәк кеүек. Ғүмер аҙағында ғына йәшәүҙәренә йәм керҙе. Элек ғәҙәти тойолған һәр нәмәне әле мөғжизә итеп ҡабул итә башланысы Айзада. "Ҡартайған инде, элекке саҡтары түгел", тип мөрхәтһенмәгән ирендә икенсе сифаттар күрҙе. Маңлайындағы һәр йыйырсығы, һәр сал сәсе, һәр күҙәнәге күңелгә яҡын икән дәһә ғүмер иткән кешеңдең. Тәненең йылыһы, тынының ипкене лә - йөрәккә ял. Йәшәргә ине ошолай, бер-береһен ҡәҙерләп, күреп туймай, тағы бер-нисә йыл! Нишләп аңламағандыр шуларҙы быға? Йәшәү үҙе бер мөғжизә икән бит, баҡтиһәң!

Ҡатынын бер секудка ла ҡалдырмаҫҡа тырышҡан ир табип бүлмәһенә лә эйәреп керҙе. Тегеләр ҙә аңлап тора, бороп сығармайҙар. Һуңғы өмөттәрҙе ҡырып налған диагнозды тыңлағанда эргәндә яҡын кешең булһа, арыу инде. Күңел бит ул, кешенең иң нескә ҡылы. Ауырлыҡтарҙы күтәрешер ышаныслы кешең булһа, шарт өҙөлмәҫ, йәшәүгә сат йәбешерлек изем булыр...

- Папаша, һеҙгә нисә йәш? - Әллә ниндәй ҡорамалдар менән Айзаданың ҡабарған эсен тикшергән табип көтөлмәгән һорау биреп, көсөргәнеште йомшартырға булды, буғай.

- Ҡырҡ туғыҙ, өс айҙан илле тула.

- Юбилей, тимәк. Ҡатынығыҙҙан ниндәй бүләк көтәһегеҙ?

- Үҙе тере булһа, шул еткән миңә. Башҡа бер ни ҙә кәрәкмәй.

- Килеп сыҡмаясаҡ шул, папаша.

Тимерйәндең йөрәге туҡтай яҙҙы, Айзаданың йөҙө ҡағыҙҙай ағарҙы.

- Шулай аҙ ҡалғанмы?

- Аҙ ҡалған шул! Һеҙҙең юбилейығыҙға самай ғына булалыр. Теләһәгеҙ ҙә бүләкһеҙ ҡалмаясаҡһығыҙ, папаша. Улығыҙ бар, ҡыҙығыҙ бар...

- Эйе, бар, улым Булат, ҡыҙым Айзирәк... Өйҙә ҡалдылар, өмөтлө хәбәр алып ҡайтыуыбыҙҙы көтөп...

- Нисек, өйҙә? Һуң бында бит улар! - Табип бер компьютер экранына, бер Айзаданың эсенә ымлап торҙо ла, барыһын да аңлап, көлөп ебәрҙе. - Һеҙ нимә, аңламанығыҙмы ни? Опухолегеҙ ысынлап һуш киткес ҙур! Етмәһә, ҡулдары ла бар, аяҡтары ла... Быныһы - ҡыҙыҡай, бынауһы - малай!

...Алтын юбилейға, саҡырмаһалар ҙа, күстәнәсен-бүләген ҡыҫтырған туған-тыумаса барыбер йыйылды. Береһе - ҡыҙыл, икенсеһе зәңгәр таҫма менән бәйләнгән ике төргәк шатлыҡлы шау-геү аҫтында ҡулдан-ҡулға китте.

- Тимерйән, кем тип ҡуштығыҙ?

Кемдеңдер биргән һорауына бәхетенән ауыҙын йыйып ала алмаған өй хужаһы :

- Береһе Авокадо инде, икенсеһе - Кальмар, - тип яуапланы. Шарҡылдап көлгән тауыштар баҫылғас ҡына, яуабын төҙәтеп ҡабатланы. - Быныһы - Айбәк, тегенеһе - Алтынай. Минең Айымдың алтындан былай ҡиммәтле бүләктәре!

- Еңгәй, әле лә ашағың киләме тултырылған кальмар?

- Килә, килмәй ни... Бына бит-тултырылған ҡамырҙың ниндәйе генә юҡ! Ул бәрәңге тултырылғаны, ул кәбеҫтәлеһе... Бына балан тултырылғаны, бына еләклеһе, - хужабикә, ҡәнәғәт йылмайып, бәлеш-пирогтарҙың төрлөһөнә күрһәтте.

Өй хужаларының бәхет тулы табынын уратып йыр һуҙылды:

Алтын ғына микән, һай,
был донъя,
Көмөш кенә микән был донъя.
Ҡәҙерҙәрен белеп көн иткәнгә
Шау сәхрә лә микән был донъя...

ДИАЛОГ

БАШҠОРТЛОҠ – УЛ ОЛО ЯУАПЛЫЛЫҠ

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

Беҙ, башҡорттар, рух, идея өсөн көрәшәбеҙ, ә матди байлыҡты бөтөнләй иҫкә лә алмайбыҙ. Сөнки, төптән уйлап ҡараһаң, кеше өсөн иң мөһиме - рух. Әхмәт Лотфуллиндың картинаһында һүрәтләнгән, дипломдары булмаһа ла, тормош фәлсәфәһен нығыраҡ аңлаған һәм белгән инәйҙәребеҙҙе, яулыҡ бәйләгән апайҙарыбыҙҙы һаҡлап алып ҡалһаҡ, был дипломлы манҡорттар үҫтергәнгә ҡарағанда күпкә яҡшыраҡ буласаҡ. Тәбиғәттә милләтте, халыҡты һаҡлай торған механизмдар бар һәм уларҙы ҡуллана белергә генә кәрәк.

Тикшеренеүселәр милли менталитетты, характерҙы тикшергәндә, уны нескә материя менән сағыштыра: һин уны юҡҡа сығарып та ташлай алмайһың, сөнки тотош халҡың өсөн яуаплыһың, шул уҡ ваҡытта артыҡ маҡтана ла алмайһың. Шул уҡ ваҡытта Ерҙең мәғлүмәт ҡыры барлығын да оноторға ярамай. Ни өсөн Башҡортостанда әүлиәләр ҡәберҙәре күп? Был да бит юҡтан ғына түгел, уның да ниндәйҙер нигеҙе бар, ул изгелеккә, ирек һөйөүгә барып тоташа. Ә ирек һөйгән кеше башҡа кешене лә ҡол яһамай.Уның тыйнаҡлығы шунан килә. Ошо абсолют критерийҙар бер сылбыр булып килә, унан сығып та булмай, һәм был тәбиғи ҙә. Үҙенде ошо критерийҙарға ярашлы тоһаң, юлдарың асылып торасаҡ, тип уйлайым. Ә инде ағым ыңғайына йөҙөп, кемгәлер ялағайланыу, юхаланыу менән көн итһәң, хатта күберәкте юғалтыуың да ихтимал. Әлбиттә, был бәхәсле, әммә бер ваҡытта ла үҙеңдең асылыңа хыянат итергә ярамай.

▸ Ошо һөйләшеүҙең бер миллион башҡортҡа барып етеүе бик икеле. Хатта гәзит уҡыусыларҙың 90 процентын күберәге уны шунда уҡ онотоуы мөмкин. Фекерҙәр күпселеккә барып етһен өсөн нимә эшләргә?

Вәкил Хажин: Эште мәктәптән башларға кәрәк. Уның өсөн беҙгә башҡорт теле дәрестәрен файҙаланырға кәрәк. Бөгөн башҡорт теле урынына башҡорт теле теорияһын уҡытабыҙ, һөҙөмтәлә балалар телде лә белмәй, грамматиканы ла. Шул дәрестәрҙе башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтеү, башҡорт көйҙәрен тыңлау, башҡорт йырҙарының һүҙҙәрен анализлау аша рух дәресе итеп ойоштороpға була бит. Башҡорт йырҙарының һүҙҙәре үҙе бер ғәжәп донъя! Һәр бер һүҙҙең мәғәнәһе бар. Мәҫәлән, "Сибай" йырын ғына алайыҡ. "Ләжәнкәле сана, зеңгер дуға, Ектерһәнә, Фатимам, туратҡа". Бында өс әйбергә иғтибар итергә кәрәк: ләжәнкәле сана, зеңгер дуға, турат. Ләжәнкәле сана (терһәкле) фәҡәт дәрәжәле түрәләрҙә генә булған. Зеңгер дуға - фәҡәт кантон башлығына ғына рөхсәт ителгән. Теләһә кем зеңгер (ҡыңғырау) ҡуйып йөрөй алмаған. Турат - ҡара ат. Ҡара атта йөрөү элек-электән килә, түрәләрҙең аты турат була.

Башҡорт теле дәрестәрендә ошоноң кеүек йырҙарҙы, тарихты тикшерергә кәрәк. Башҡорт теле, әҙәбиәте дәресендә тотош антологияны түгел, Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ"ын, Зәйнәб Биишеваның "Кәмһетелгәндәр"ен йәки Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ"ын, Рауил Бикбаевтың поэмаларын, Рәми Ғариповтың шиғырҙарын уҡы - шулар артығы менән етә балаларға. Ә беҙ уларға рифмаға ярашлаштырылған, бер ниндәй мәғәнәһе булмаған, иҫтә ҡалмай торған һәм иҫтә ҡалыуы мөмкин дә булмаған шалтырауыҡ шиғырҙарҙы, тотош антологияны өйрәтергә тырышабыҙ. Дәрестәрҙә башынан алып аҙағына тиклем фон булып ҡурай моңо, башҡорт музыкаһы торһа, улар балаларҙың аңына һеңер ине. Юҡһа, бөгөн балалар ҡолаҡсын тығалар ҙа, барабан ритмына йөрөйҙәр. Бындай музыка балаларҙы зомбиға әйләндерә.

▸ Ҡырым башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Даларис Имелбаев бер әңгәмә ваҡытында: "Мин ҡайҙа ғына сығыш яһаһам да, Башҡортостан - батырҙар иле, тием", - тигәйне...

Вәкил Хажин: Уның һүҙҙәрендә хаҡлыҡ бар. Башҡорт халыҡ әкиәттәрен алып ҡараһаҡ, уларҙа бөтөн персонаждар ҙа батыр тигән эпитет менән йөрөй. Хатта аҙаҡтан хыянат иткәндәренән дә ахырғаса батыр исеме тартып алынмаған. Һәм башҡорт әкиәттәрендәге батырҙар, дөрөҫөн әйткәндә, тик яуыз көс менән көрәшәләр ҙә, уны еңгәс, яуыз көстөң халыҡтан талап алған байлығын кире халыҡҡа ҡайтарып бирәләр һәм уларҙың бөтөн батырлығы ла, эше лә, әкиәте лә шуның менән тамамлана. Батыр үҙенең ауылына ҡайтып, кәләш алып, балалар үҫтереп ҡәҙимгесә тормош көтә. Иң мөһиме, ул донъя күреп йөрөй, фәһем ала, аҡыл йыя, әммә Уралына ҡайта. Төрлө алдау юлы менән, сихри көстәр ярҙамында батша булып китмәй. Ул үҙ көсө менән, үҙенең намыҫлылығы, ғәҙеллеге, дөрөҫлөгө менән яуыз көстө еңә. Буштан ғына ундай әкиәттәр тыумаған. Шундай әкиәттәр тыуҙырған икән, шул беҙҙең халыҡтың менталитетында ята ла инде.

Тимәк, халыҡта батырҙар һәм уларҙың эргәһендә уларға ҡаршы эшләүселәр ҙә булған һәм бар. Улар алдаша, хәйләләшә, шул сәбәпле үҙҙәренең көсһөҙләгән, ҡурҡаҡлығын күрһәтмәҫкә тырыша. Әммә ниндәй генә ҡаршылыҡ тыуҙырмаһындар, ундай батырҙарҙы ысын батырҙар үлтермәй, ғәфү итә, еңелсә генә шелтәләй йә ҡыуып ебәрә. Тимәк, ысын батыр эргәһендә ундай батырҙар була, әммә батыр уға иғтибар итмәй.

Зилә Рәхмәтуллина: Гераклид әйтмешләй, һин бары ысынлап көслө булғанда ғына һәйбәт була алаһың. Әкиәттәребеҙ ошо ысын батырлыҡты күрһәтә лә инде. Әгәр фольклор өлгөләрендә батыр тигән эпитет ҡулланыла икән, тимәк, милләттең һәр вәкилен батыр тип әйтергә була.

Вәкил Хажин: Башҡорт халҡында бер мәҡәл бар: булыр илдең балаһы бер-береһенә, батыр, тиер, бөлөр илдең балаһы бер-береһенә, бахыр, тиер. Бер-беребеҙгә бахыр булмайыҡ.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Һүҙҙе йомғаҡлап, әлбиттә, тағы әллә күпме фекерҙәр яҙырға булыр ине кеүек, әммә уларҙың барыһын да шағирә Лариса Абдуллина үҙенең "Беҙҙәр" тигән шиғырында әйтеп биргән. Беҙ аңлатырға, һәр кемдең күңеленә һалырға, аңына һеңдерергә теләгән башҡортлоҡ, башҡорт характеры, моғайын, ошо юлдарҙа асыҡ сағылалыр:

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ,
Була алмайбыҙ башҡа.
Күккә ҡарап рәхмәт әйттек,
Алғыштар яҙҙыҡ ташҡа!

Ҡарғыштар ҡалһын тарихҡа,
Алмайбыҙ уны йөкмәп.
Беҙҙең өсөн иң изгеһе -
Ватан, тел, әсә, икмәк!

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ -
Тоғролоҡ беҙҙең ҡанда.
Һыналған беҙҙең антыбыҙ,
Быуаттар - беҙҙең һандал.

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ -
Ҡанатлы ғәмәлебеҙ.
Һуңғы һулышҡаса балҡыр
Еңеүсе әләмебеҙ.

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ,
Күңел ишеге асыҡ.
Йәшәмәйбеҙ йөрәктәге
Ихтилалдарҙы баҫып.

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ,
Имандай өмөтөбөҙ!
Оҙаҡламай ил яларбыҙ -
Ышанығыҙ, көтөгөҙ!

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ,
Ярты лаш түгел, бөтөн.
Беҙ йәшәйбеҙ еребеҙҙә
Сөйөп халыҡ өмөтөн.

Беҙ булһаҡ, шундай булабыҙ -
Булғанбыҙ, буласаҡбыҙ!
Уралдың һәр ҡаяһына
Бөркәттәй ҡунасаҡбыҙ!
Ҡәүемебеҙҙе ишәйтеп,
Уралға туласаҡбыҙ!

Зәйтүнә ӘЙЛЕ әңгәмә ҡорҙо.

Башҡорт үҙ тарихының беҙгә билдәле 2500 йыл арауығында нимәләр генә күрмәгән дә, ниндәй генә юлдар үтмәгән, нимәләр генә кисермәгән. Бәлки, байҙары ла, батшалары ла, ғәскәре лә, үҙенең дәүләте лә булғандыр, ләкин улары һаҡланмаған бит. Телебеҙ һаҡланып ҡалған. 40-ҡа яҡын төрки телдәре араһында бер беҙҙә генә һ, ҫ, ҙ өнө бар. Был беҙҙең боронғолоҡто раҫлаусы уникаль күренеш. Йырҙарыбыҙҙы ҡарағыҙ. Шул тиклем моң уларҙа! Ул бөгөнгө барабан тауышы түгел. Барабан - ул ритм, ә беҙҙең көйҙәрҙә ритм юҡ, үлсәү ҙә юҡ. Күпме теләйһең, тыныҡ күпмегә етә - шунса һуҙаһың. Телебеҙ, көйҙәребеҙ, бейеүҙәребеҙ һаҡланған, тәбиғәткә мөнәсәбәтебеҙ һаҡланған, әкиәттәребеҙ һаҡланған. Шулар беҙгә алға ҙур өмөт, ышаныс менән ҡарарға мөмкинлек бирә.

ЗАУЫҠ



ӘСӘЙЕМ ҺАБАҠТАРЫ

* * *

"Кеше һүҙе кеше үлтерә",- тип
Әйтә торған ине әсәйем,
Шуға күрә төрлө ғәйбәттәрҙән
Өҫтөнөрәк булып йәшәйем.

Тыңламайым кеше һөйләгәнде,
Ә яңылыш әгәр ишетһәм,
Насар һүҙгә, әсәй, ышанмайым,
Яҡшы һүҙҙе генә иш итәм!

Кемдер берәү, яҡыныңа яғып
Ялған ғәйеп, әгәр еткерһә,
Һин ашыҡма, зинһар, ышанырға,
Ул һүҙ әгәр зыян килтерһә.

Кеше һүҙе кеше үлтерә бит,
Кемдер бушты һөйләй юрамал,
Тотҡан ерҙән һындырырға түгел,
Ҡарар ҡабул итеп дыуамал.

Яҡындарға кәрәк ышанырға,
Ситкә түгел, түгел дошманға,
Яман һүҙҙәр аңды томалай ҙа,
Ағыу булып аға тән-ҡанға.

Яҡшы хәбәр булһа, ышанығыҙ!
Яҡтылыҡта булһын уйығыҙ,
Ҡара хәбәр менән килгәндәрҙе
Һеперткеләп ситкә ҡыуығыҙ!

* * *

"Ҡарғыш төшмәй, рәнйеш төшә,
Кеше рәнйетмә, балам!"
Әсәй, ошо һабағыңды
Көн һайын иҫкә алам.

Эшем менән, һүҙем менән,
Белеп йәки яңылыш,
Әгәр берәйһен рәнйетһәм,
Рәнйетер мине яҙмыш.

Минең арттан кеше күҙе
Ҡалмаһын йәшкә тулып,
Кеше рәнйеше төшмәһен
Юлыма тышау булып.

Рәнйегәнде Хоҙай яҡлар,
Ғәйеплене язалар.
Ғәҙел итеп йәшәй алһам,
Урап үтер ҡазалар.

* * *

"Әсә күңеле - балала,
Бала күңеле - далала".
Әсәй, ошо һүҙҙәреңде
Иҫкә алдым тағы ла.

Көнө буйы хәбәр көтәм -
Ҡыҙым йөрөй ҡалала,
Хаҡлы булғанһың, әсәйем -
Бала күңеле далала!

Уйлап сығарам йөҙ сәбәп
Баламды аҡлар өсөн,
Үҙе әсәй булғас, аңлар
Әсәйлек хисе көсөн.

Белмәй әле балаҡайым
Алда ниҙәр күрәһен,
Берәй ҡасан ул да шулай
Мине иҫләр, күрәһең...

Фирүзә АБДУЛЛИНА.
(Дауамы бар).

✓ *"Әлегә зыянлы булыуы тулыһынса иҫбатланмаған продукция ҡулланыу көтөлмәгән һөҙөмтәләргә килтереүе бар. Граждандарыбыҙҙы сифатһыҙ аҙыҡтан һаҡларға тейешбеҙ", - тине Владимир Путин.*

ИНТЕРНЕТТАН

ЭШ УРЫНЫНДА... нисек туҡланырға?

■ Офиста эшләү, ғәҙәттә, әүҙем аҡыл эшмәкәрлеге менән бәйле. Баш мейеһенә даими энергия кәрәк, шуға ла эш ваҡытында нисек туҡланырға кәрәк һуң? Ғалимдар раҫлауынса, бөтөн ризыҡтар ҙа баш мейеһенең эшмәкәрлеген әүҙемләштермәй. Мәҫәлән, сейә кеүек файҙалы емеш-еләктәрҙә мелатонин күп, шуға ла улар йоҡоно килтерә. Ҡәһүә эскәндән һуң 60-90 минут ваҡыт үткәс кенә уның тәьҫирен тойорға була. Офиста банан ашау ҙа кәрәкмәй. Ул шулай уҡ йоҡоно килтерә. Көнбағыш, палтус балығы, тәм-том да шундай уҡ һөҙөмтәгә алып килә. Шулай булғас, эш урынында нимә ашарға һуң? Белгестәр билдәләүенсә, эремсек, йогурт кеүек һөт ризыҡтарына, төрлө бутҡаларға, йәшелсәгә, алмаға, йөҙөмгә, грушаға өҫтөнлөк бирергә кәрәк.

■ Тоҙҙо күп ашау ҡан баҫымына йоғонто яһай, тигән фекер хата, ти Нью-Йорк һәм Канзас ғалимдары. Баҡтиһәң, юғары ҡан баҫымының сәбәбе тоҙҙа түгел, ә шәкәрҙә икән. Ғалимдарҙың тикшеренеүҙәре күрһәтеүенсә, тап шәкәр гипоталамусҡа кире тәьҫир итә, һөҙөмтәлә йөрәк тибеше йышая, ҡан баҫымы күтәрелә, былар иһә кешене инсультҡа алып килеүе бар. Икенсе типтағы диабет сире, артыҡ ауырлыҡ барлыҡҡа килмәһен тиһәгеҙ, көнөнә 5-7 балғалаҡтан күберәк шәкәр ашамағыҙ, тип кәңәш итә белгестәр.

■ Мунсаның файҙаһы тураһында күп һөйләргә мөмкин. Яңыраҡ Тояма институты ғалимдары мунса буюының кеше организмына тәьҫирен тағы бер тикшереп, түбәндәге һығымталарға килгән. Аҙна һайын мунсаға йөрөгән кешенең йөрәк эшмәкәрлеге яҡшыра. Бынан тыш, мунсаның кешенең интеллектуаль һәләтәренә лә йоғонто яһауы асыҡланған. Тикшеренеүҙәрҙең етәксеһе, профессор Такаши Охорри белдереүенсә, мунса ғүмерҙе оҙайта, кәйефте күтәрә. Эҫе һауала баш мейеһе һыуынырға теләп, ҡайһы бер өлөштәренең әүҙемлеген көсәйтә, улар араһында яҡшы кәйеф өсөн яуап биргәне лә бар.

■ Элегерәк кофеин ҡулланыу ҡолаҡ сыңлауына килтерә, тип иҫәпләйҙәр ине. Көнбайыш Онтарио университеты ғалимдары быныҡ киреһен раҫлаған. Көнөнә 3-4 сынаяҡ ҡәһүә эсеү ҡолаҡ сыңлау мөмкинлеген 15 процентҡа түбәнәйтә, ти улар. Кофеин эске ҡолаҡта урынлашҡан нервы күҙәнәктәренә тәьҫир итә һәм был күңелһеҙлекте оноторға мөмкинлек бирә. Быға тиклем ҡолаҡ сыңлауын дауалаусы рәсми саралар юҡ.

■ Ҡайһы саҡта кире тойғолар һәм уйҙар шул тиклем биләп ала, уларҙан ҡотолоу ысулдары юҡ кеүек тойолоп китә. Белгестәр был проблеманы түбәндәгесә хәл итергә кәңәш бирә. Америка ғалимдары мәктәп уҡыусылары ярҙамында тикшеренеүҙәр үткәргән. Үҫмерҙәр үҙҙәренең кире тойғоларын һәм хәүефтәрен ҡағыҙға яҙған. Уларҙың яртыһы был ҡағыҙҙарҙы һаҡлаған, яртыһы утта яндырған. Психологтар билдәләүенсә, кире тойғолары яҙылған ҡағыҙҙарҙы яҡҡан уҡыусылар психологик яҡтан үҙҙәрен күпкә яҡшыраҡ тойған, улар стрестарҙы ла еңелерәк кисергән. Уйҙарҙы ҡағыҙҙа һаҡлау хәлде киҫкенләштерә генә, ти ғалимдар. Ә бына яҡшы уйҙар яҙылған яҙмаларҙы ваҡыты-ваҡыты менән уҡып тороу кәйефте күтәрә, эмоциональ торошто яҡшырта.

АҢ БУЛ, КЕШЕ!

ТӘБИҒӘТТЕ АЛДАП БУЛАМЫ?

Йәки гены үҙгәртелгән ризыҡтың ыңғай һәм кире яҡтары

2013 йылдың сентябрендә Рәсәй Хөкүмәте ҡарары менән ГМО-орлоҡтарға теркәү үткәрергә һәм уларҙы илебеҙҙең теләгән бер мөйөшөндә (эксперимент майҙансыҡтарында ғына түгел) сәсергә рөхсәт бирелде. Ошо ҡарарға ярашлы, быйыл 1 июндән алып ГМО-орлоҡтарҙы үҙебеҙҙә сәсеп үҫтереү мөмкинлеге тыуҙы.

Фекерҙәр ҡаршылығы

Быныҡ буйынса төрлө фекерҙәр яңғырай. Кемдер тәбиғәт күренештәренең көтөлмәгән хәлдәргә килтереп терәүен һәм ауыл хужалығы ярым тарҡалған илдә йәшәгән халыҡты туйҙырыу мәсьәләһен иҫәпкә алғанда, бындай продукция бары тик файҙаға ғына буласаҡ, тип бәһа, икенселәр, йәйрәп ятҡан баҫыу-яландарыбыҙ буш ятҡанда, илдә ГМО-ризыҡтарға урын булырға тейеш түгел, Рәсәй экологик яҡтан таҙа ризыҡтар менән генә туҡланып та үҙен туйҙыра алырлыҡ хәлдә, тип бара. Депутаттарыбыҙ ашығыс ҡарар ҡабул итте, хөҙер шуны төҙәтергә маташа, тигән һүҙҙәр ҙә йөрөй. ГМО-продукцияны үҫтереү һәм әйләнешкә ебәреү буйынса власть даирәләрендә лә бәхәс ҡупты. Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев составында ГМО булыу-булмауын тикшереү өсөн бөтә аҙыҡ-түлеккә, орлоҡҡа мониторинг үткәрергә ҡушты. Ул шулай уҡ Рәсәйҙең бик күп ауыл хужалығы майҙанына эйә булыуын һәм үҙ ихтыяжын ГМО-һыҙ ғына ла ҡәнәғәтләндерә алыуын билдәләне. "Әгәр ҙә Америкаға бындай аҙыҡ оҡшай икән, әйҙә, рәхәтләнеп ашай бирһен. Тик беҙ яһалма аҙыҡ-түлекһеҙ ҙә йәшәй алабыҙ", - тине.

Ғөмүмән, бөгөн ГМО тураһында нимә генә һөйләмәйҙәр. Күпме генә бәхәсләшһәләр ҙә, әлегә тиклем аныҡ ҡына ҡарарға килә алмайҙар. "ГМО-продукцияны, Европаға эйәреп, зарарлы тип әйтеү дөрөҫ түгел. Был һүҙҙәрҙе продукция киң танылыу алған осраҡта финанс ҡытлығы кисерәсәк бай фермерҙар уйлап сығара, сөнки тәрбиәләп үҫтереү өсөн әллә ни сығымдар талап ителмәгән, оҙаҡ ваҡыт боҙолмай һаҡланған мул уңыш магазин кәштәләренә тулһа, фермерҙарға хаҡты төшөрөүҙән башҡа бер сара ла ҡалмаясаҡ", - тип тә әйтә ҡайһы берәүҙәр. Шулай ҙа, социологик һорау алыуҙарҙан күренеүенсә, күпселек Рәсәй халҡы был продукцияларға һағайыбыраҡ ҡарай. Ә Федерация Советы ағзаһы Антон Беляков: "Бындай аҙыҡ-түлекте кешеләрҙә түгел, ә хайуандарҙа һынарға кәрәк", - тип белдерә.

Гены үҙгәртелгән орлоҡ нимә ул?

Ябай ғына итеп әйткәндә, был орлоҡтар йөҙәр йылдар буйы түгел, ә ни бары өс йыл эсендә шул уҡ селекционер-генетиктар күҙәтеүе аҫтында лабораторияларҙа һайлап алына. Бындай үҫемлектәр һыуыҡҡа ла, ҡоролоҡҡа ла, төрлө ҡоротҡостарға ла бирешеп бармай, мул уңыш бирә. Шул арҡала бындай продукцияға хаҡтар ҙа күпкә түбән булырға тейеш. Ауыл хужалығы белгестәре тағы ла шундай факт килтерә. Баҡһаң, ГМО-орлоҡтарҙы файҙаланған хужалыҡтар тулыһынса ошо орлоҡҡа "ултыра", имеш. Йәғни, модификацияланған орлоҡтар сифаты менән үҙенән күпкә ҡайтыш булған тәбиғи "кәрҙәштәрен" тыуған тупрағынан ҡыҫырыҡлап сығара икән. Мутант орлоҡтар тағы ла көслөрәк сүп үләндәрен барлыҡҡа килтерә. Ә был иһә өҫтәмә сығымдар талап итә. Әлбиттә, кемдер зыян күрһә, икенсе берҙәренә был файҙаға ғына, сөнки ҡоротҡостарға ҡаршы көслө ағыуҙарҙы ла ошо уҡ корпорациялар етештерә. Америка "гиганттарының" тағы ла бер өҫтөнлөгө бар. Улар ГМО-орлоҡтарҙы "ҡыҫыр" итеп сығара, йәғни был орлоҡтарҙан киләһе йылға бер нәмә лә сыҡмай. Бындай хәл Һиндостанда булған да инде. Меңләгән фермер орлоҡтарын тулыһынса яңыртырға мәжбүр булған.

ГМО тураһында ишетеп белмәгән кеше ҡалмағандыр хөҙер. Шулай ҙа күптәр уның нимә аңлатҡанын аныҡ ҡына белеп етмәйҙер әле. ГМО-ны үҫемлектәрҙән, хайуандарҙан алалар һәм уға башҡа төрлө сифаттар өҫтәү өсөн икенсе организмдың генын өҫтәйҙәр. ГМО генетик яҡтан модификацияланған организм, тигәнде аңлата, йәғни организм генлы инженерия ярҙамында яһалма рәүештә үҙгәртелә. Тәүге трансгенлы үҫемлек 1983 йылда Германияның үҫемлекселек институтында булдырыла. Ә инде 1994 йылда Америка супермаркеттары кәштәһенә генетик яҡтан модификацияланған тәүге йәшелсә - помидор сығарыла.

Эксперттар белдереүенсә, кеше организмына ГМО-ның нисек тәьҫир итеүен белеү өсөн тиҫтә йылдар кәрәк. Рәсәйҙә был продукция менән тәжрибәләр йыш үткәрелә. Биология фәндәре докторы Ирина Ермакова 2005 йылдан 2010 йылға тиклем һөт, кондитер, колбаса изделиеларында бөгөн йыш ҡулланылған трансгенлы сояның тере организмға тәьҫирен тикшергән. Һөҙөмтәлә тәжрибә үткән ҡомаҡтарҙың эске ағзаларында патология барлыҡҡа килгән, күп кенә ҡомаҡтар үлгән, ҡалған 40 процент ҡомаҡ етлекмәгән, ә тере ҡалғандары иһә тоҡомһоҙ ҡалған. Ермакованың тәжрибәһе йәмәғәтселектә ҙур бәхәс тыуҙырҙы.

Әлеге ваҡытта АҠШ, Франция, Бөйөк Британия, Рәсәй илдәренең ғалимдары ГМО-ның кире һәм ыңғай яҡтарын тикшереү буйынса халыҡ-ара эксперимент үткәрә. Был иң объектив һынау буласаҡ, сөнки унда ГМО-ны яманлағандар ҙа, хуплағандар ҙа ҡатнашасаҡ. Шуныһы ҡыҙыҡ, ГМО-продукцияны Африка һәм Азия халыҡтарын аслыҡтан ҡотҡарыу өсөн кәрәк, тип баралар. Тик бына Африка илдәре һуңғы 5 йыл эсендә составында ГМО булған продукцияны үҙҙәренә индерергә рөхсәт бирмәй. Бөгөн бөтә донъяла 100-ҙән ашыу генетик яҡтан модификацияланған үҫемлек бар. Бындай сәсеүлек майҙандары йылдан-йыл арта. Рәсәйгә 22 төрлө модификацияланған үҫемлек индереү рөхсәт ителгән. Улар араһында кукуруздың, картуфтың, сояның, шәкәр сөгөлдөрөнөң бер нисә сорты бар. ГМО-продукция АҠШ, Канада, Бразилия, Германия һәм Ҡытай баҙарында өҫтөнлөк ала. АҠШ-та сәселгән 85 процент кукуруз, 90 процент самаһы ҡуҙаҡлы культура генетик яҡтан модификацияланған. Бөтә донъя сауҙа ойошмаһына ингәндән һуң Рәсәй ҙә ГМО-продукцияны арттырырға тип хәл итә. Ошо йәһәттән ГМО-орлоҡтар сәсеүгә рөхсәт бирелә лә инде. Тик Мәскәү үҙ позицияһын 180 градусҡа үҙгәртте һәм бындай орлоҡтарҙы сәсеүгә юл ҡуймаҫҡа булды. "Әлегә зыянлы булыуы тулыһынса иҫбатланмаған продукция ҡулланыу көтөлмәгән һөҙөмтәләргә килтереүе бар. Граждандарыбыҙҙы сифатһыҙ аҙыҡтан һаҡларға тейешбеҙ", - тине Владимир Путин. Әлбиттә, әгәр ҙә ГМО-орлоҡтар сәсеүҙе яйға һалһаҡ, бер баҫыуҙан ғына ла 20 процентҡа күберәк уңыш алыр инек. Шулай ҙа Рәсәй, үҙ граждандары мәнфәғәтен яҡлап, бюджетҡа инәсәк 10 млрд долларҙан ашыу килемдән баш тартты. Киләсәк быуын, халыҡтың сәләмәтлеге хаҡында һүҙ барғанда миллиардтар менән генә эш итеп булмай. Быныҡ менән беҙ ныҡлы, сәләмәт киләсәккә нигеҙ һалабыҙ, тине белгестәребеҙ ҙә.

Әлеге ваҡытта ГМО закондарын боҙған осраҡта язаны ҡәтғиләштереү мәсьәләһе ҡарала. Бындай закон боҙоуҙарҙы терроризмға тиңләргә һәм 20 йылға иректән мәхрүм итергә, тигән тәҡдим индерә депутаттарыбыҙ. Рәсәйҙә ҡайһы бер ГМО-продукттарҙы файҙаланыу тыйылһа ла, бөгөн власть вәкилдәре бындай продукцияны илдә тулыһынса тыйыу буйынса тәүге аҙымдарын яһай.

Организм өсөн зыянлы ризыҡтар

Натрий глутаматы (621). Составында Е621 өҫтәлмәһе булған ризыҡтар организмда бәйлелек барлыҡҡа килтерә. Тәжрибә күрһәтеүенсә, натрий глутаматынан сыҫкандар һуҡырая. Был иң йыш ҡулланылған аҙыҡ өҫтәлмәһе. Ул организмда күп йыйылһа, өйәнәк ҡуҙғыта.

Транс-майҙар. Майлылығы 72 процентҡа да әҙ булған майҙарҙы файҙаланыу ярамай, сөнки ул ысын май түгел.

Пластик һауыттағы еңелсә тоҙланған балыҡ. Яҡшы тоҙланған балыҡ бары тик майҙа ғына оҙаҡ һаҡлана.

Арахис. Хәҙерге ваҡытта күп кенә етештереүселәр уны генлы инженерия ярҙамында үҫтерә һәм уға, төрлө бөжәктәр зарарламаһын өсөн, петунияның гены индерелә. Шуға күрә, арахис һәр ваҡытта ла яңы һәм матур күренә.

Краб таяҡсалары. Улар краб эссенцияһы ҡатыштырылған ғәҙәти соя. Ә сояның 95 проценты тиерлек модификацияланған.

Тиҙ әҙерләнә торған ярмалар һәм ярма киҫәктәре. Улар составында тәбиғигә яҡын булған төрлө тәмләткестәр һәм буяғыстар тупланған.

Татлы газлы һыуҙар. Был эсемлектәр үҙҙәре үк сарсау тыуҙыра. Унда күбеһенсә шәкәрҙе алыштырыусы матдәләр ҡулланыла. Уның составында булған ортофосфор кислотаһы кәрәкле микроорганизмдарҙы үлтерә. Ә консервант булараҡ файҙаланылған бензоат натрийы (Е211) ферментарҙы ҡыҫырыҡлай һәм матдәләр алмашыныуын боҙоп, һимереүгә килтерә.

Колбасалар. Уларҙың составында күбеһенсә 40 процентҡа тиклем йәшерен майҙар һәм тәм биреүсе өҫтәлмәләр була. Күп кенә колбаса, сосиска, сарделька 80 процент трансгенлы соянан тора.

Тауыҡ. Уның зыянлы булмаған матдәләр менән тултырылыуын күптәр яҡшы белә. Ә бына бындай итте ирегеттәргә ашарға ярамауын барыһы ла белеп етмәйҙер. "Тултырылған" тауыҡҡа гормондар дисбалансын боҙоусы зыянлы гормондар өҫтәлә.

Тәмләткестәр өҫтәлгән сәй. Бындай сәйҙәргә саманан тыш күп буяу һәм кислота ҡушыла.

Майонез, кетчуп, соустар. Майонезға канцерогенлы транс-майҙар ҡушылған була, ә был иһә холестерин кимәлен арттырыуға килтерә. Бигерәк тә пластик һауыттарҙағы майонез зарарлы, сөнки уға ҡушылған аш һеркәһе пластиктан алда әйтелгән канцероген бүленеп сығыуына килтерә. Майонезда консерванттар һәм тотороҡландырғыстар ҙа саманан тыш күп.

Картуф чипсылары, сохариҙар. Әҙерләгән ваҡытта бик күп канцероген бүленеп сығыуы сәбәпле, был аҙыҡтар рак ауырыуына килтереүе бар.

Пакеттағы һуттар. Был осраҡта бер ниндәй ҙә тәбиғи һуттар тураһында һүҙ алып барыу мөмкин түгел. Рәсәйҙә был һуттарҙы Ҡытай сеймалынан эшләйҙәр. Унда 50 процент химия булһа, 50 проценты консерваланған емеш-еләктән һәм эремсек һыуынан тора.

Сағыу ҡағыҙҙағы сәйнәй торған кәнфиттәр, ҡаҡтар һәм чупа-чупс. Бик күп шәкәрҙән, химик өҫтәлмәләрҙән, буяуҙарҙан тора.

Кипкән емештәр. Диетологтар көкөрт иретмәһендә һәм көкөрт газы менән эшкәртелгән кипкән емеш-еләк ашауҙы тыя. Хәҙерге технологиялар буйынса алма, груша, абрикостар нәҡ ошо юл менән эшкәртелә лә инде. Эшкәртелмәгән күрәләр ҡуңырыраҡ төҫтә була. Бындай емештәрҙе һатып алғандан һуң йылымыс һыуҙа бер нисә минут тоторға кәрәк. Был осраҡта ундағы көкөрт ике-окисы һыуға сығасаҡ.

Һурпалы кубиктар, әҙер аштар. Уларҙың төп составы - тоҙ һәм глютамат (тәм көсәйткес). Иң ҙур хәүеф уларҙың көслө канцероген булыуында.

Пакеттағы эремсектәр. Уларҙың составында киптерелгән һөт һәм үҫемлек майы була. Күп осраҡта унда ысын эремсек бөтөнләй булмай.

Тиҙ әҙерләнә торған тукмас. Әгәр ҙә бындай ризыҡ ашаһағыҙ, уның тәмләткестәрен һалмаҫҡа тырышығыҙ. Һалмалары ысын тәбиғи аҙыҡтарҙан әҙерләнһә лә, уның соус һәм тәмләткестәре натрий глутаматынан ғына тора.

Етештереүсе эре компанияларҙың аҙыҡ-түлеген балаларға биреү ҙә хәүефле, сөнки күбеһенең составында генетик яҡтан модификацияланған матдәләр бар. Бындай етештереүселәргә Nestle, Gerber, Semper, Ko-linska, Friesland Nutrition компаниялары эләгә.

Ҡаймаҡ. Пластик һауыттағы күп кенә "ҡаймаҡтар" бары тик үҫемлек майҙарынан тора һәм "ҡаймаҡ продукты" тип йөрөтөлә.

Эльза МӨХӘМӘҘИЕВА әҙерләне.

ҺАБАҠТАР

ХӨКӨМГӘ КИЛТЕРГӘН ҮС

Үс алыу… Әҙәм балаһына хас булған иң түбән сифаттарҙың береһелер был. Үкенескә ҡаршы, кешеләргә түбән тәгәрәү ҙә хас. Ваҡланыу, ҡасандыр булған үпкәне көндән-көн үҫтереп нәфрәткә әүерелдереү, артабан үс алыуға барып етеү…

Хөкөм эскәмйәһенә ултырған был ағай кеше үҙенең ғәйебен тулыһынса таныны. Олпат, һәр һүҙе аҡыл менән әйтелгән был кешенең шундай түбәнлеккә төшөүенә тәүҙә ышанғы ла килмәне. Бер ауылда йәшәгән ҡан ҡәрҙәше менән оҙаҡ йылдар аралашмағандар. Туғандар араһында мәңгелеккә һалынған ҡара шәүләнең сәбәпсеһе кем, нимә икәнен дә әйтеп булмай. Ҡасандыр аралашып, һәр байрамды ғына түгел, ә һәр көндө тиерлек бергә үткәргән туғандар дошманға әүерелгән. Ауылдаштары уларҙың холҡон күптән белеп бөткән. Шуға күрә уларҙы бер ҡасан да бер табын артына саҡырмағандар.

Нисәмә йылдар аралашмаған ағалы-ҡустылы был кешеләр уйламағанда һүҙгә килешә. Магазинда осрашҡан ирҙәр тәүҙә бер-береһенә күтәрелеп тә ҡарамай. Тик уйламағанда улар араһында ғауға сыға. Оло йәштәге ағай оҙаҡ тыныслана алмай. Йортона ҡайтҡас, үрле-ҡырлы йөрөй. Иренең холҡон яҡшы белгән ҡатыны бер ни ҙә өндәшмәй, уның тыныслаһыуын көтә. "Юҡ, былай булмай! Бөтөнләй шашты был малай!" тип үрһәләнә хаҡлы ялдағы кеше. "Малайҙың" үҙенән дүрт йәшкә генә кәсе булыуы тураһында ла күптән онотҡан була, күрәһең.

Оло йәштәге ағай ҡан ҡәрҙәше менән талаштың төрлө сәбәптәрен күҙҙән үткәрә. Улар был ауылға киттән күсеп килә. Тәүҙә һәр һыныҡ икмәкте бүлеп, татыу йәшәйҙәр. Был уларға килмешәк исемен еңелерәк күтәрергә ярҙам итә. Ағалы-ҡустылы бер-береһенә терәтеп йорт күтәрә, мал көтә, баҡса үҫтерә. Тәүҙә сәмләнеп донъя көткән туғандар артабан бер-береһенән көнләшә башлай. Ошо алама тойғоноң ҡара йыланға әүерелеп, туғанлыҡ хистәрен быуып һалғанын һиҙмәй ҙә ҡалалар. Артабан улар араһында ябай күренештәр өсөн дә ыҙғыш сыға башлай. Ҡайһы саҡта хатта баҡсала йөрөгән тауыҡтар ҙа оло болаға әүерелә. Ирҙәренең нәфрәте ҡатындарға ла күсә. Әле кисә генә йән әхирәттәй аралашҡан ханымдар ҙа талаша башлай. Тик балалар ғына һаман бергә уйнай. Әммә уларҙың урамда үҙ-ара әҙ генә талашыуы ла ата-әсәләрҙең нәфрәтенә ут өҫтәй. Ҙурая килә балалар ҙа үҙ-ара һыйышмай башлай. Ауыл халҡы өсөн таң менән ике туғандың йәки уларҙың хәләл ефеттәренең әрләшеүе ғәҙәти хәлгә әүерелә. Хәйер, ауыл аҡһаҡалдары тәүҙә уларҙың низағлашыуына сик ҡуйырға маташа. Тик нәфрәттән күҙҙәре томаланған туғандар бер кемде лә ишетмәй.

Берҙән-бер көндө туғандарҙың кәсеһе ҡунаҡҡа китә. Йорттарын ҡарап тороу эше ҡаршы яҡ күршеһенә тапшырыла. Тик кеше донъяһын һәр саҡ күҙәтеп булмай шул. Кис етеп, мал ҡайта башлағас, бар халыҡ урамға ағыла. Ошо саҡта ныйырҙар ҡарауһыҙ ҡалған йорттоң баҡсаһын емереп инә. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, был мал оло туғандыҡы була. Улар ҙа был көндө ҡалаға китеп, һуң ғына ҡайта. Әммә кәсе туғаны ағаһын һыйырҙарҙы баҡсаға яуыз ниәт менән индереүҙә ғәйепләй. Ике йорт араһында талаш бер нисә көн тынмай. Һөҙөмтәлә, кәсе туған йортон һатып, ауылдың икенсе осона күсә.

Бәхетһеҙлеккә ҡаршы, был дошманлыҡ нәҫелдән-нәҫелгә күсеп килә. Хөкөм эскәмйәһенә ултырған ағай ҙа магазиндағы талаштан һуң оҙаҡ тыныслана алмай. Уның йөрәген үс алыу тойғоһо өтөп алып бара. Төн ҡараңғылығы ҡаплағас, ул урамға тәмәке тартырға сыға. Шырпыны һыҙғанда башына зәһәр уй килә. Ул оҙаҡ уйлап тормай, урам буйлап китә. Туғанының ҡышҡылыҡҡа әҙерләгән бесәнен ташып бөткәнен яҡшы белә ул. Ағай кеше шырпыны һыҙып, бесәнгә ташлай. "Бына һиңә! Кемгә тауыш күтәргәнеңде белерһең хәҙер!"-тип үсәй ул. Ҡоро бесән гөлт итеп тоҡана.

Йоҡларға ятҡан ауылды кемдеңдер әсе тауыш менән "Янғын! Бесән яна!" тип ҡысҡырыуы уята. Бар халыҡ урамға ташлана. Тик бесәнде ҡотҡарып булмай, ул тулыһынса янып бөтә. Янғын урынына килгән тәфтишселәр ут сығыу осраҡлы булмауын аңлай. Ғәйепле кешене улар тиҙ таба. Сөнки ҡаза күргән хужа: "Бесәнгә тик ул ғына ут төртә ала, башҡа бер кем дә түгел", - тип белдерә.

Сәстәренә сал төшкән кеше ҡылған ҡылығынан уңайһыҙлана, күрәһең, ул судты айырым тәртип менән, тикшереүһеҙ генә үткәреүҙе үтенә. "Йән тартмаһа ла, ҡан тарта", тип юҡҡа әйтелмәгән, бесәне, кәртә-ҡураһы янған ир ағаһын төрмәгә ултыртмауҙарын үтенде. Ғәйепле кеше шартлы рәүештә ике йылға иркенән мәхрүм ителде.

Эйе, әҙәм балаһына юғары әхлаҡи сифаттар ҙа, уларҙы бер мәлдә юҡҡа сығарған, түбәнселеккә төшөргән хис-тойғолар ҙа хас. Нәфрәтеңде, асыуыңды ауыҙлыҡлай белеү күп бәләләрҙән ҡотҡарасағын оноторға ярамай. Кем белә, бәлки, был хөкөм оҙайлы йылдар дауам иткән туғандар дошманлығына нөктә ҡуйыр?..

Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА.

УҢЫШ ҠАҘАН

ЛИДЕРЛЫҠТЫҢ 21 СИФАТЫ

Нисек итеп артыңдан башҡаларҙы эйәртергә?

Үҙтәртип: һеҙҙең башланғысығыҙҙа торған иң беренсе кеше - үҙегеҙ

Эш башҡарылмаҫ элек, награда тураһында уйламағыҙ. Публицист Майк Делани: "Эшләмәүселәр ҙә, эшһөйәрҙәр ҙә бер үк кимәлдә эш хаҡы алған бизнес төрөндә йәки сәнәғәт тармағында, иртәме-һуңмы, ялҡауҙар эшһөйәрҙәргә ҡарағанда күберәк асыҡланасаҡ", - тип бик тапҡыр билдәләгән. Әгәр һеҙҙең үҙтәртибегеҙ аҡһай икән, һоло бутҡаһын ашарҙан алда тәм-томға йәбешеүегеҙ мөмкин.

Ҡарашығыҙ һөҙөмтәгә төбәлгән булһын. Эште башҡарыр элек, һөҙөмтәһенән алда һәр саҡ уның ауырлығына иғтибар иткәндә, эшләргә теләгегеҙ бөтөнләй һүрелеүе бар. Әгәр ауырлыҡтарға оҙаҡ иғтибар бирһәгеҙ, үҙтәртип урынына үҙегеҙҙе йәлләү тойғоһо ғына тыуыр. Шуға күрә, икенсе ваҡыт, ниндәйҙер эш башҡарырға булһағыҙ, дөрөҫ ғәмәлдәрҙең һеҙгә ниндәй файҙа килтерәсәген күҙаллағыҙ һәм ең һыҙғанып, башкөллөй эшкә сумығыҙ.

Үйланырға мәжбүр итеүсе һорауҙар. Юморист яҙыусы Х. Джексон кәсе Браун: "Тәртипкә һалынмаған талант - роликлы конькиҙар кейгән нигеҙаяҡҡа оҡшаш. Бик күп хәрәкәт эшләнә, әммә неҙ был йән эйәһенең ҡасан да булһа алғамы, артҡамы, уңғамы, нулғамы барырын белмәйһегеҙ". Әгәр һәләтегеҙ булып та, бик күп хәрәкәт яһайныгыҙ, әммә һөҙөмтә юҡ икән, неҙгә, күрәһең, үҙтәртип етешмәй. Һуңғы аҙнаның графигын ентекләп ҡарағыҙ. Даими тәртипле эшмәкәрлеккә күпме ваҡыт бүлдегеҙ? Һөнәри үҫешегеҙгә һәм камиллашыуығыҙға этәргес булырҙай нимә эшләнегеҙ? Сәләмәтерәк булыу өсөн ниндәй ғәмәл ҡылдығыҙ? Килемегеҙҙең бер өлөшөн һаҡлауға йәки инвестицияға һалдығыҙмы? Атап үтелгәндәрҙең береһен дә эшләмәнегеҙ һәм үҙегеҙҙе, бының менән һуңыраҡ шөғөлләнермен, тип тынысландырҙығыҙ икән, тәртибегеҙгә ныҡлап тотонорға ваҡыт.

Өйгә эш

Үҙтәртипте күтәреү өсөн түбәндәгеләрҙе эшләгеҙ:

- Өҫтөнлөктәрегеҙҙе ҡарап сығығыҙ. Үҙегеҙ өсөн мөһим булған ике йәки өс өлкәне билдәләгеҙ. Уларҙы ҡағыҙға теркәп, ошо өлкәлә үҫешер өсөн үҙтәрбиәнең ниндәй төрҙәре һәм ысулдары ҡулланылырға тейешлеген яҙығыҙ. Улар тормошоғоҙҙоң көндәлек йәиһә аҙналыҡ өлөшөнә әйләнеү мөмкинлеге биргән план эшләгеҙ.
- Нигеҙләүҙәр исемлеге төҙөгөҙ. Әле генә төҙөлгән исемлектәге дисциплиналарҙы индереүҙән алынасаҡ файҙа һәм өҫтөнлөктәрҙе теркәп барыу өсөн ваҡыт бүлегеҙ. Был исемлекте көн дә үҙегеҙ күргән ергә элеп ҡуйығыҙ. Бер нәмә лә эшләгегеҙ килмәгән ваҡыттарҙа уны уҡып сығығыҙ.
- Аҡланыу ғәҙәтенән арығыҙ. Үҙегеҙгә һалынған талаптарҙы үтәй алмау мөмкинлеге алдында ҡалған барлыҡ сәбәптәрҙе яҙығыҙ. Ошо аҡланыуҙарҙы ентекләп уҡып сығығыҙ. Һеҙ уларҙы буш ҡыуыҡ кеүек елгә осоророға тейешһегеҙ. Хатта ниндәйҙер аҡланыу нигеҙле кеүек тойолғанда ла, үҙегеҙҙә уны еңергә көс табырлыҡ юл эҙләгеҙ. Ялҡауланыу йәки эште эшләмәү мөмкинлеге биргән бер генә дәлилде лә ҡалдырмағыҙ. Иҫегеҙҙә тотоғоҙ: бары тик тәртип ярҙамында ғына хыялдарығыҙҙы тормошҡа ашыра аласаҡһығыҙ.

Джон МАКСВЕЛЛ.



13 ОКТЯБРЯ ПОНЕДЕЛЬНИК
ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.45 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское".
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Дом с лилиями". 9-я и 10-я серии. Мелодраматический сериал (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 Ночные новости.
01.15 "Рэй Донован". Сериал (16+).
02.20, 03.05 "Наедине со всеми" (16+).
03.00 Новости.
03.20 "В наше время" (12+).
04.15 "Контрольная закупка".

РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
